ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

8-14 октябрь (карасай) 2022

№40 (1030)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атай сере**



7

**Мәңгелек хәҡиҡәт,**

**йәки яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы ынйы бөртөгөләй йыйыу фарыз**



8-10

**Бәхетле булғың килһә...**

**үҙең дә кемделер бәхетле ит!**



12

**Арҡа терәр директорың булһын...**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын тәбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 октябрҙән 13 октябргә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ*

**11 октябрҙә Башҡортостан сираттағы дәүләт байрамын - Республика көнөн билдәләй. Әйткәндәй, республикабыҙҙа ошо гәҙәти генә көҙгө бер көндә байрам саралары 31-се мәртәбә уҙғарыла: 1992 йылдың 27 февралендәге "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле көндәр хаҡында" тигән законға ярашлы, 11 октябрь - Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияһын ҡабул итеү көнө - дәүләт байрамы тип иғлан ителгәйне.**

# ДӘҮЛӘТСЕЛЕК...

## һәр саҡ һаҡланған



Әйе, 1990 йылдың көҙгөсә һалҡынса бер көнө ошо осорҙоң иң иҫтәлекле датаһы булып, дәүләт документтарында ғына түгел, замандаштарыбыҙ хәтерендә һәм хәтирәләрендә лә үтә ҡәҙерле бер иҫтәлек булып ҡалды.

Ошо ҡатмарлы, алда ни булырын бер кем дә белмәгән тарихи көндәрҙә, ҡасандыр һис бер ҡаҡшамаҫтай тойолған ҡеүәтле Советтар Союзында сәйәси буталыш үә сыуалыш, иҡтисади көрсөк сәскә ата ине инде. Нисек кенә булмаһын, СССР халыҡтары ил етәкселегенән етди реформалар башлауҙы, төбәктәргә иҡтисади үҙаллылыҡ биреүҙе, власты демократлаштырыуҙы талап итте. Ҡыҙғаныс, әммә ул саҡтағы оло илебеҙҙең беренсе һәм һуңғы президенты Михаил Горбачёв етәкселегендәге СССР Хөкүмәте тиҫтә йылдар дауамында сисә алмаҫлыҡ бер төйөнгә уҡмашҡан сәйәси, иҡтисади һәм ижтимағи проблемаларҙы тиҙ арала хәл итеү юлын таба алманы. Күрәһең, быға ул замандағы етәкселектә башланған конфликттар, талаш-тартыштар, интригалар, инде ҡартайышып бөткән коммунист-консерваторҙарҙың сәйәси фекерләү, алдан күрә белеү мөмкинлектәренең үтә сикләнгән булыуы ла булышлыҡ иткәндәр.

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

### *Балаларҙа, йәштәрҙә һәм ололарҙа илһөйәрлек тәрбиәләү ниндәй саралар менән тормошҡа ашырылырға тейеш?*

***Шамил ӘХМӘҘИЕВ, Чечен һуғышы ветераны:*** Был бик тәрән һәм фәлсәфәүи тема һәм уны бер-ике һүҙ менән, өҫтәнмөҫтән генә аңлатыу ҙа мөмкин түгел. Шәхсән минең өсөн илһөйәрлек атай-әсәйеңде яратыуҙан һәм хөрмәт итеүҙән башлана. Мин - илһөйәр, тип, ситтәр алдында күкрәк ҡағып, бөтә илде бер үҙең ҡурсаларҙай булып ҡағынып та, һине бағып үҫтергән кешеләргә ҡарата мәрхәмәтһеҙ булһаң, илһөйәрлегең бер тингә лә тормай.

Һәр бала үҙенең тирә-яғындағы кешеләрҙең һүҙен, үҙ-үҙҙәрен тотошон, ҡылыҡтарын күреп, күңеленә һеңдереп үҫә. Тимәк, илһөйәрлек тәрбиәләүҙе тәү сиратта үҙебеҙҙән башларға кәрәк. Әгәр ҙә ауыҙымдан сыҡҡан һүҙҙәрем ғәмәлдәрем менән тура килмәй икән, үҙ баламдан нимә талап итә алам?

Бала саҡта уҡ күңелгә һалынмаһа, олоғайған кешелә илһөйәрлек тойғолары уятырға тырышыу мәғәнәһеҙ, минеңсә. Беҙ, мәҫәлән, октябрь значогы тағып йөрөнөк, шулай уҡ пионер галстугын йөрөткән һуңғы быуын булдыҡ. Бына шул ваҡыттарҙа мәктәп линейкаларында гимндар уйнатылды, байраҡтар күтәрелде, беҙ патриотик йырҙарҙы барыбыҙ ҙа яҡшы белдек. Унан һуңғы быуын гимнды спорт ярыштарында ғына ишетеп үҫте, буғай. Шуға күрә әле мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында ил һәм республика байрағын тантаналы күтәреүҙе, гимндар тыңлауҙы яңынан ҡайтарыуҙарына бик шатланам. Башта "Был нимәгә кәрәк ул?" тип бит сирнайтҡан малайҙарым хәҙер гимнды ятлап алды, башҡа көндә ҡарышһалар ҙа, дүшәмбе иртән матур итеп мәктәп формаһын кейәләр. Быларҙың барыһы ла халыҡтың һәм дәүләттең суверенлыҡ символына - дәүләт байрағына, гербына, гимнына ихтирам, ә уның аша илһөйәрлек тәрбиәләүҙең матур бер өлгөһө.

Спорт тәрбиәһе шулай уҡ илһөйәрлек тойғоһон үҫтереүгә һәм нығытыуға бер аҙым. Балаларҙың һәм йәштәрҙең физик яҡтан ныҡ, сыҙамлы булыуы уларҙы батыр йөрәкле, ҡыйыу итә. Ә бындай сифаттарға эйә булғандар тыуған ерен, илен һаҡлауҙан ситләшмәй. Илһөйәрлек төшөнсәһе тыуған ерҙе яратыуҙан тыш, шулай уҡ тыуған теленде һаҡлауға, уны яҡшы белеүгә ҡайтып ҡала. Шулай булғас, илһөйәрлек тәрбиәләүҙең бер сараһы - балаларына тыуған телен, шулай уҡ үҙебеҙ йәшәгән илебеҙҙең тарихи һәм мәҙәни мираҫын хөрмәт итергә өйрәтеү. Сәләмәт, айыҡ тормош алып барыуҙы пропагандалау һәм балаларҙы, йәштәрҙе, ғөмүмән, йәмғиәтте ошондай тормошҡа ҡеүәтләү шулай уҡ илһөйәрлектең бер нигеҙе, сөнки насар ғәҙәттәр менән йәшәүсенең йөрәгендә илһөйәрлеккә урын юҡ.

12+

✓ *Ниһайәт, тауыш биреү һөҙөмтәләре иғлан ителде, халыҡ быны, геү килеп, шатлыҡ-ҡыуанысҡа тулы, дәрт-дарманлы ауаздар менән ҡаршы алды, ихласлап тороп, бер-береһен ҡотланы.*



ШАҒИР ҺҮҘЕ



## ИЛҺӨЙӘРЛЕК

*Әсә һөтө, наҙы менән генә*
*Һеңә илһөйәрлек күңелгә.*
*Тарихыңды, киләсәкте һөйөү -*
*Һатып алыр тойғо түгел дә.*

*Тамырыңдың тәрәнлеген тойоу,*
*Тыуған яҡҡа аяҡ тартыуы.*
*Йыһандағы урыныңды уйлап,*
*Йәшәү мәғәнәһе артыуы.*

*Илһөйәрлек атай-әсәйеңде*
*Йылы һүҙҙән мәхрүм итмәүең.*
*Атай-олатайҙар зыяратын*
*Хаж ҡылмайса ситкә китмәүең.*

*Илһөйәрлек - әгәр табандарың*
*Иркәләнеп баҡһа тупраҡҡа.*
*Тәбиғәтем алтынланды, тиеп,*
*Һөйөп бағыу төшкән япраҡҡа.*

*Илһөйәрлек - күрше-күләнеңдең,*
*Ҡайғы-шатлыҡтарын бүлешеү.*
*Илһөйәрлек - Ҡафтау артындағы*
*Туғаныңдың хәлен белешеү.*

*Илһөйәрлек - инде мең быуатлап*
*Килгән йолаларға таяныу.*
*Аһ, халҡым, тип ятып китеүҙәрең,*
*Аһ, балам, тип килеп уяныу.*

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА.**

## РАББЫМ, ҺАҠЛА!

*Раббым, һаҡла ирҙәрҙе,*
*Афәт башын күтәрҙе.*
*Аҫыл ирҙәр юлланалар*
*Баҫтырырға хәтәрҙе.*

*Раббым, таҙарт аңдарҙы,*
*Ҡайтар тыныс таңдарҙы.*
*Тәләф итмәй генә һаҡла*
*Түлгә тамыр ҡандарҙы.*

*Раббым, берүк ярлыҡа,*
*Күндер Үҙең барлыҡҡа.*
*Төшөрә күрмә Илемде*
*Ҡоллоҡ тигән хурлыҡҡа.*

*Раббым һаҡла ирҙәрҙе,*
*Һаҡла Илде, ерҙәрҙе.*
*Атайҙары ҡаҙымаһын*
*Улдарына ҡәберҙе.*
*Раббым, һаҡла Илемде!*
*Раббым, һаҡла Еремде!*

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ*

# ДӘҮЛӘТСЕЛЕК...

## һәр саҡ һаҡланған



**(Башы 1-се биттә).**

Тап ошо осорҙа, уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағы - 90-сы йылдар башында республикабыҙҙа башҡорт милли хәрәкәте көсәйеп китте. Әлбиттә, милли хәрәкәт башында торған зыялыларыбыҙ ошо көсөргәнешле мәлдәрҙә халҡыбыҙ, республикабыҙ мәнфәғәттәрен яҡлауҙы төп маҡсат итеп ҡуйҙы. Шуның өсөн дә улар Башҡортостандың дәүләт суверенитетын иғлан итеүҙе ихлас һәм үтә ҙур ҡыуаныс менән ҡабул итте. Ошо хәрәкәткә ҡушылып киткән бер ябай башҡорт зыялыһы булараҡ, ул ваҡытта булып үткән ваҡиғалар хәтеремә тәрән уйылып ҡалған.

Башҡорт дәүләт педагогия институтында эшләп, буласаҡ уҡытыусыларға психология фәнен уҡытып йөрөгән ваҡыт. 1990 йылдың 11 октябрендә, иртәнге лекциялар тамамланыу менән, хәҙерге Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы Ижтимағи-сәйәси үҙәк тип йөрөтөлгән бина яғына йүнәлдем. Тап шул бинала БАССР Юғары Советының тарихи сессияһы бара ине. Байтаҡ ҡына халыҡ йыйылған, барыһы ла, мөкиббән китеп, депутаттарҙың репродукторҙар аша яңғыраған сығыштарын тыңлай, аралаша, фекерҙәре менән уртаҡлаша. Милләттәштәребеҙҙең киләсәк менән бәйле ниндәйҙер оло өмөт-ышаныстары психологик көсөргәнеш тәьҫирендә уларҙың уйсан һәм етди ҡарашлы йөҙҙәрендә бермә-бер сағылыш тапҡан. Тәнәфестә урамға сыҡҡан депутаттар халыҡ менән аралаша, уларҙың ышанысын аҡларға һүҙ бирә. Ниһайәт, тауыш биреү һөҙөмтәләре иғлан ителде, халыҡ быны, геү килеп, шатлыҡ-ҡыуанысҡа тулы, дәрт-дарманлы ауаздар менән ҡаршы алды, ихласлап тороп, бер-береһен ҡотланы. Шул саҡта үҙем, бина болдорона күтәрелеп: "Йәшәһен суверенитет, ошо тантаналы көндө бөтөн республика байрамы итеп иғлан итәйек!" - тип яр һалдым. Ул аҙаҡтан ысынлап та шулай булды.

Ул осорҙағы хәл-ваҡиғалар хәҙер республикабыҙҙың яңы тарихында үҙ урынын алды. Әле тыуған-үҫкән ватаныбыҙ Республика тип атала икән, был уның дәүләтселеге символы булып ҡала бирә. Әйткәндәй, республика һүҙе үҙе лә үтә боронғо: латин телендәге "res publica" төшөнсәһе, йәғни "йәмғиәт, халыҡ эше" тигән һүҙбәйләнеш, ваҡыттар үтеү менән, дәүләт мәғәнәһендә ҡулланыла башлаған. Шәхсән үҙем ошо сәйәси

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

### Балаларҙа, йәштәрҙә һәм ололарҙа илһөйәрлек тәрбиәләү ниндәй саралар менән тормошҡа ашырылырға тейеш?

***Гөлназ ӘМИНЕВА, Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге сәнғәт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Белем биреү системаһының дөйөм маҡсаты - рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һанлаған үҙ иленең гражданын тәрбиәләү. Бала мәктәптә күп ваҡытын уҙғара, ошонда күптәр ғүмерлеккә дуҫтар таба, мәктәптә ул үҙенең йәмғиәттең бер өлөшө икәнен ысын мәғәнәһендә аңлай башлай. Йәмғиәттең ниндәй булыуы, уның йәнәшәһендәге йәштәштәренең һәм ололарҙың йәшәүрәүеше, ниндәй тойғолар һәм уй-хистәр кисереүе, башҡарған эштәре баланың аңына һеңеп ҡалып, уның артабанғы ғүмер юлын билдәләй, йәшәү мәғәнәһен хасил итә. Шулай итеп, илһөйәрлек баланың бөтә булмышын солғап алған, башҡарған эштәренә нигеҙ булған, йәмғиәттә үҙ-үҙен тотоуын көйләгән эске бер үҙәк ролен үтәй, һәм ошо үҫеш, асыштар, аңлау процесында уның йөрәгенә илһөйәрлек орлоғон нығлап сәсеп ҡалдырыу бик мөһим. Шулай уҡ ул тойғоноң йылдар дауамында үҫеп нығыныуына юлдар асыҡ булырға тейеш, йәғни илһөйәрлек тәрбиәһенең мәктәп эскәмйәһендә генә тороп ҡалыуына юл ҡуйырға ярамай.

Илһөйәрлек тәрбиәләү беҙҙең тәүбурыстарыбыҙҙың береһе. Был бурысты атҡарып сығыуҙың төрлө юлдары бар. Мәҫәлән, театрҙарға барып, ошондай темаларға арналған спектаклдәр ҡарауҙы, төбәктең, тотош илдең һәм ошонда йәшәгән халыҡтың тарихын һаҡлаусы, төрлө ваҡиғаларҙы сағылдырған бай сығанаҡ булған музейҙарға йөрөүҙе, халыҡ йырҙарын һәм бейеүҙәрен, ҡобайырҙарын, мәҡәл-әйтемдәрен өйрәтеүҙе, ғөмүмән, илһөйәрлек темаларын күтәргән сараларҙа әүҙем ҡатнашыуҙы беҙ файҙалы тәрбиә сараһы тип ҡабул итәбеҙ, сөнки бындай урындарҙа балаларҙа тыуған иленә, туған теленә, халҡының ғөрөф-ғәҙәтенә, йолаларына, тарихҡа булған ҡыҙыҡһыныу бермә-бер арта. Иң мөһиме, балалар менән эшләгән уҡытыусының, тәрбиәсенең үҙенең дә илһөйәр булыуы шарт. Үҙ эшен, балаларҙы ғына түгел, туған республикаһын яратмаған кешенең мәктәптә эшләргә хаҡы юҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда һуңғы тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 501 яңы осрағы асыҡланған. Әлеге ваҡытта республикала 249 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкән 174 кеше стационарҙа дауалана. 15 пациент ауыр хәлдә, ике пациент үпкәне яһалма елләтеү аппаратында. Ә 4,3 мең кеше амбулатор шарттарҙа дауалана, уларҙың 1 357-һе - оло йәштәгеләр. Уҙған тәүлектә өс пациент вафат булған.

✓Рәсәйҙә быйыл көҙгө саҡырылыш ноябрҙә, йәғни ғәҙәттәгенән бер айға һуңыраҡ башлана, ә срочниктарҙың демобилизацияһы октябрь-декабрь айҙарында уҙғарыла. Был хаҡта Рәсәйҙең оборона министры Сергей Шойгу ведомствоның селектор кәңәшмәһе барышында белдерҙе. Быйыл 120 мең, йәғни былтырғыға ҡарағанда 7,5 меңгә аҙыраҡ кешене саҡырыу планлаштырыла.

✓Республика йортонда Радий Хәбиров хәрби бурысын үтәгән ваҡытта яраланған Шайморатов исемендәге батальон яугирҙары һәм уларҙың ғаиләләре менән осрашты. Был хаҡта ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. "Хәҙер егеттәрҙең реабилитацияһы тамамлана, тиҙҙән улар алғы һыҙыҡҡа - үҙҙәренең батальонына ҡушыла. Әлегә иһә уларға туғандары һәм яҡындары менән күрешергә ваҡыт биргәндәр. Яугирҙарыбыҙ менән республиканың уларға нисек ярҙам күрһәтә аласағы хаҡында фекер алыштыҡ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

✓Башҡортостанда ауыл мәктәптәренән 25 йәш уҡытыусыға 690 мең һум күләмендә грант ярҙамы күрһәтелә. Башҡортостандың рәсми хоҡуки мәғлүмәт интернет-порталында Хөкүмәттең ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға гранттар биреү тураһында тейешле ҡарары баҫылған.

✓Башҡортостанға иген етештереүселәргә ярҙам күрһәтеү өсөн Рәсәй Хөкүмәтенең резерв фондынан 586 миллион 713,4 мең һум бүленә. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Документтан күренеүенсә, аҡса аграрийҙарҙың бойҙай, арыш, арпа һәм кукуруз етештереүгә һәм һатыуға киткән сығымдарының 50 процентҡа тиклемен ҡаплау өсөн йүнәлтелә. Дөйөм алғанда, илдең 64 төбәгә 10 миллиард һум күләмендә өҫтәмә ярҙам алырға тейеш.

термин атамаһына борондан уҡ оло бер мәғәнә һалынғанын тоям: республикабыҙҙың асылын, уның йәшәйешен халыҡтарыбыҙ, тотош йәмғиәтебеҙ алып барған дөйөм эшмәкәрлектән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай бит!

Башҡорт халҡының бик боронғо замандарҙан бирле үҙенсәлекле дәүләтселек сифаттары булыуы билдәле инде. Дәүләтте ниндәй критерийҙар дәүләт итә һуң? Иң элгәре ил-дәүләтте хасил итеүсе халыҡ булырға тейеш. Тарих фәнендә иртә урта быуаттарҙан бирле башғарт-башҡорт атамаһы менән билдәле булған ҡәүем хаҡындағы яҙма сығанаҡтар бар. Йәнә билдәле бер халыҡ йәшәгән территория булып, уны биләгән, уға хужа булған халыҡ хаҡында ла мәғлүмәт булыуы фарыҙ. Ә бит тарихи Башҡорт иле, ул илдең географик сиктәре хаҡында ла бик ышаныслы мәғлүмәттәр бар. Башҡорт иле һәм уның ерҙәре хаҡында байтаҡ ҡына урта быуат тарихсылары яҙма мәғлүмәт ҡалдыра. Уларҙың иң билдәлеләренән XII быуатта йәшәгән ғәрәп географы Мөхәммәд әл Иҙрисиҙе атап үтергә була. Ул Башҡорт иленең ике өлөштән - Тышҡы һәм Эске Башҡорт ерҙәренән хасил булыуы хаҡында яҙа. Иҙриси Хазар ҡағанаты хакимы резиденцияһынан (Волга йылғаһының түбәнге яғында, Каспий диңгеҙенә яҡын ҡала) Башҡорт иленә тиклем 27 көнлөк, бәшәнәктәрҙән эске башҡорттарға тиклем - 10 көнлөк, ә болғарҙарға - 25 көнлөк юл булыуын билдәләй.

Башҡорт иленең ул саҡта ҡалалары ла була. 922 йылда Ибн Фаҙлан да үҙенең сәйәхәтнамәһендә ғәрәп хәлифе илселегенең Болғар ханлығына Башҡорт иленең көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш сиктәре аша үтеп китеүен теркәп ҡалдыра.

Башҡорт ил-дәүләте менән идара итеүсе хакимдар хаҡында ла тарихи яҙмалар беҙҙең көндәргә килеп еткән. Бында тарихи шәхес булған Башҡорт хан исеме иҫкә төшә. XIII быуаттың 30-сы йылдарында Тарихи Башҡортостан ерҙәренә килгән венгр миссионер-монахтары (Отто, Юлиан, Рубрук) яҙмаларында "паскатир" халҡы сарацин, йәғни ғәрәп динен (Ислам) тотоусы ҡәүем булып, уларҙың хакимының (короленең) бик үсал кеше булыуы хаҡында иҫкә алына.

Боронғо башҡорттар Бөйөк Болғар хандарын да үҙ хакимдары итеп таный. Артабан, татар-монгол яуынан һуң, Башҡорт илендә вертикаль власть структураһы урынына, ырыу-ҡәбилә ҡанундарына ярашлы, горизонталь идара итеү формаһы (ырыу аҡһаҡалдары, батырҙар, бейтархандар етәкселеге, йыйындарға хас ырыу демократияһы) нығынып ҡала, ул бер ни тиклем арауыҡта Рус дәүләтенә ҡушылғас та һаҡланып килә бирә (Башҡорт иленең Рәсәй составына инеүе - XVI быуат урталарында - шул уҡ ырыу-ара үҙаллы идара итеү системаһына ярашлы башҡарыла). Быларҙы үҙенсәлекле боронғо Башҡортостан дәүләтселегенең кире ҡаҡҡыһыҙ дәлиле итеп ҡарау фарыҙ.

Башҡорт халҡының үҙаңында ошондай дәүләтселектәре хаҡында хәтирәләр онотолмай йәшәй бирә, сөнки күп һанлы ихтилалдар, халҡыбыҙҙың теле, дине, ере өсөн көрәшеүе һөҙөмтәһендә улар Рәсәй империяһында ла берҙән-бер аҫаба халыҡ - үҙ еренең хужаһы булып ҡала бирә. Тап шул сәбәпле халҡыбыҙ зыялылары XX быуат башындағы Рәсәй инҡилабы осоронда, яңы дәүләтселеккә нигеҙ һалып, Башҡортостан Республикаһын төҙөүгә өлгәшә. Граждандар һуғышының иң ауыр бер мәлендә В.И. Ленин етәкселек иткән Совет Хөкүмәте, Башҡортостандың үҙаллылығын рәсми рәүештә танып, уның РСФСР составында автономиялы республика статусына эйә булыуы хаҡындағы тарихи Килешеүҙе раҫлай.

Шулай итеп, ҡатмарлы совет осоронда ла, унан һуң да халҡыбыҙ, нисек кенә сикләнгән булмаһын, үҙенең дәүләтселеген һаҡлап ҡала алды, сөнки был дөйөм ил берҙәмлеге һәм именлеге өсөн хәл иткес шарттарҙың береһе булып ҡала. Тарих һынауҙарын үткән ошо принцип яҡын һәм алыҫ киләсәктә лә теүәл үтәләр, республикабыҙ йыл һайын үҙенең дәүләтселек көнөн байрам итер тигән ышаныста ҡалайыҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## ӘСӘ ҺҮҘЕ

# ҠАЙТЫҒЫҘ!



**Быға тиклем ҡайҙалыр алыҫта, күҙ күрмәгән яҡта, беҙ белмәгән кешеләр тарафынан алып барылған һуғыш ҡасафаты ете ят нәмә булһа, 22 сентябрҙән алып ул беҙҙә лә һәр бер өйгә килеп инде лә… кемдеңдер улына, иренә, атаһына, еҙнәһенә йә кейәүенә саҡырыу ташланы. Йөрәктәрҙә ҡурҡыу, шом, хәүеф уянды…**

Алыҫта түгел, эргәбеҙҙә генә икән дә баһа был афәт! Һәр кем үҙенсә аңларға, башҡаларға аңлатырға тырыша башланы был хәлдә. Хатта урамдарға сығырға, һуғышҡа ҡаршы митингылар ойошторорға өндәүселәр ҙә табылды. Юҡ, урамға сығып ҡына туҡтатыу мөмкин түгел был афәтте. Сөнки инде ул беҙҙән генә, беҙҙең илебеҙ етәкселегенән генә лә тормай. Ил башлығы: "Бөгөндән ҡан ҡойошто туҡтатырға! " - тип әйткән сүрәттә лә бөтөн Европанан ябырылған яуызлыҡ иртәгә беҙгә килмәҫ тип кем әйтә ала? Был бит Украина менән Рәсәй араһындағы низағ ҡына түгел, был НАТО менән Американың Рәсәйҙе яулап алырға тырышҡан күптәнге сәйәсәте.

В.В. Путин власҡа килгәнгә тиклем булған ауыр замандарҙы ишетеп түгел, үҙ иңемдә татып беләм. Иҫегеҙҙәләр: бөтөн завод-фабрикалар туҡтаған, ил таланған, халыҡ бөлгөнлөккә төшкән. Буп-буш магазин кәштәләре. Ярты йыллап эш хаҡы алмағанбыҙ. Өйҙә икмәк менән сәй-шәкәр булһа, күңел тыныс, сөнки улары ла булмаған көндәр йыш ҡабатланды. Эшләнек, әммә аҡса ала алманыҡ. Эш хаҡы ла, балалар пособиеһы ла талондар менән түләнде. Ә талондарҙы тауарға әйләндерер инең, магазиндарҙа перловка менән араҡынан башҡа бер ни юҡ. Икеһен дә алабыҙ, перловканы инде ашап бүккәнбеҙ, күргә лә килмәй. Ә араҡыны, исмаһам, һатып була. Оят булһа ла әйтәйем, мин дә һаттым. Аптырағандың көнөнән. Балаларға ризыҡ һатып алыр өсөн. Һәм был бит Бөйөк Ватан һуғышы йылдары түгел, ә 1990 - 2000 йылдар арауығы ине! Балаларҙы мәктәпкә уҡырға ебәрер өсөн портфелгә түгел, хатта дәфтәр-ручкаға ла аҡса булманы. Иҫәп таяҡсалары урынына шырпы алып бара торғайныҡ, тип, ҡыҙҙарым һаман да иҫләй. Мин ул заманды онотманым. Һәм уның ҡабатланыуын теләмәйем. Емерек илде тергеҙеп, рэкетты бөтөрөп, завод-фабрикаларҙы йүнәтеп, киренән етеш тормошҡа ҡайтарыусы шул Путин түгелме ни? Мең рәхмәтлемен уға!

Бөтөн Европаны үҙ йоҙроғона туплап, беҙҙең газ, нефть, алтын-көмөшөбөҙгә, ожмахҡа тиң еребеҙгә хужа булырға ынтылған АҠШ-тың ысын ниәттәрен аңламаған Украина етәкселегенә беҙ нисек яуап бирергә тейешбеҙ? Митингылар менәнме ни? Юҡ! Улай ғына туҡтатырлыҡ булһа, был ҡан ҡойош башланмаған да булыр ине.

Эйе, мин дә әсәй, минең дә улдарым бар. Әле бына оло улыма армияға повестка көтәбеҙ. Минең дә йөрәгем һыҙлай. Мин дә һуғышҡа ҡаршы. Әммә әлеге осраҡта, әлеге көндә беҙ бары бергә тупланып ҡына был агрессияға ҡаршы тора алаҫаҡбыҙ!

Элек "Мин янмаһам, һин янмаһаң, ул янмаһа - кем һуң ҡараңғылыҡты таратыр?" тигән шиғыр юлдары бик модала булды. Бөгөн дә шул афоризм кеүек юлдарҙы аҙ ғына үҙгәртеп ҡабатлайым: донъяға ябырылған афәткә ҡаршы минең улым бармаһа, һинең улың бармаһа, уның улы бармаһа - кем һуң илебеҙҙе һаҡлар? Илебеҙ, киләсәгебеҙ, тыныслығыбыҙ - ил һаҡсылары ҡулында. Тиҙ арала был ҡан ҡойошто туҡтатып, имен-һау әйләнеп ҡайтһын гәзиз улдарыбыҙ!

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы,**
**5 бала әсәһе.**
**Йылайыр районы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

### *Балаларҙа, йәштәрҙә һәм ололарҙа илһөйәрлек тәрбиәләү ниндәй саралар менән тормошҡа ашырылырға тейеш?*

***Арсен ҒӘЛИУЛЛИН, Белорет районы, 5 бала атаһы:*** С. Ожеговтың һүҙлегендә илһөйәр кеше "Үҙ халҡына тоғро, тыуған илен яратыусы, уның мәнфәғәте өсөн ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүсе һәм ҡорбан булырға әҙер кеше", тип билдәләнгән. Бында шуны оноторға ярамай: илһөйәрлек ҡандан күсмәй, уны тәрбиәләргә генә мөмкин. Шуға күрә мин, атай кеше булараҡ, ошо тәрбиәне үҙ балаларыма бирергә тейешмен.

Бөгөнгө көндә йәмғиәт мәғлүмәти көсөргәнеш кисермәй. Баҫма һәм электрон ваҡытлы матбуғат, башҡа төрлө интернет майҙансыҡтар, радио, телевизор - быларҙың барыһында ла мәғлүмәттең һәр төрлөһө бик күп. Һәм уларҙың күбеһенән агрессивлыҡ, әҙәпһеҙлек түгелә, йәштәрҙе рухи-әхлаҡи көрсөккә этәрә. Балаларҙы, йәштәрҙе ошо күренештән һаҡлап алып ҡала алыуыбыҙ илһөйәрлек тәрбиәләүҙең бер өлгөһө тип уйлайым.

Балалар баҡсаһында, мәктәптә һәм юғары уҡыу йорттарында электэлектән илһөйәрлек темаһына иғтибар ҙур булды, әммә һуңғы ваҡыттағы ваҡиғалар был талапты тағы ла көсәйтте. Әлеге мәлдә илһөйәрлек, рухи-әхлаҡи төшөнсәләр мәктәп программаһында төп урындарҙың береһен биләй. Һәм был дөрөҫ аҙымдыр, сөнки ата-әсәләр, мәктәп һәм, ғөмүмән, йәмғиәт был йүнәлештә бер-береһен тулыландырып, ҡеүәтләп торорға тейеш. Әгәр ҙә ошо сылбырҙың береһендә илһөйәрлеккә ҡарата кире фекер әйтелһә, ул баланың, йәш кешенең күңелендә шикләнеү хистәре уятырға мөмкин. Шулай уҡ илһөйәрлек тәрбиәләйем тип, артыҡ ҡыланыу ҙа кәрәкмәй, сөнки ул бөтөнләй кире эҙемтәләргә килтерергә лә мөмкин. Бөтә нәмәлә лә сама белеү мотлаҡ.

Әйтергә кәрәк, илһөйәрлек тәрбиәләүҙең һөҙөмтәһен беҙ бөгөн йәки иртәгә түгел, ә күпмелер йылдар үткәс кенә күрәсәкбеҙ. Һәм уның ниндәй булырын бер кем дә аныҡ ҡына әйтә алмай. Беҙгә бары тик көтөргә һәм күҙәтергә генә ҡала.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы ярҙам күрһәтеү өсөн мобилизацияға эләккәндәрҙең ғаиләләре реестрын төҙөргә ҡушты. "Был йәһәттән бик иғтибарлы булырға кәрәк. Бөтә муниципалитеттарҙа ла мобилизацияланғандарҙың ғаиләләре реестрын төҙөү мөһим. Был ҡатмарлы эш түгел, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Беҙҙә көндәлек ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән штаб ойошторолған". Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, хәҙерге көндә хөкүмәттең төп бурысы - яугирҙарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү.

✓Истанбулда потенциаль бизнес-партнерҙар өсөн Башҡортостан Республикаһының презентацияһы ойошторолдо. Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо турала белдерҙе. "Был илдә 39 республика предприятиеһының бизнес-миссияһы эшләй. Тендерҙа Белореттың "Урал пружина заводы" еңеп сыҡты, бөгөн иртән Төркиә вагондары өсөн пружиналар оҙатыу буйынса контрактҡа ҡул ҡуйҙы", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашырға әҙерләнгән яугирҙар алдында сығыш яһау өсөн агитбригадалар ойошторорға кәрәк. Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә мәҙәниәт министры Эминә Шафиҡоваға ошондай бурыс йөкмәтте. "Агитбригадалар ойоштороуығыҙҙы һорайым. Мин егеттәр менән һөйләштем, улар тыңларға ваҡытыбыҙ бар, һағынабыҙ, тинеләр. Шуға күрә яҡташтарыбыҙ күп булған һәр урында был айҙа ике тапҡыр сығыш яһарға кәрәк", - тине республика Башлығы.

✓Башҡортостанда иртә срокта иҫәпкә торған 11 меңдән ашыу йөклө ҡатын-ҡыҙ пособие ала. Йыл башынан алып был түләүҙәргә финанслауға Пенсия фонды 292 млн һум аҡса бүлгән, тип хәбәр итә ведомство. Йөклөлөктөң тәүге 12 аҙнаһында иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙарға айына 6600 һум түләү ҡаралған. Пособие тәғәйенләгәндә килем (ғаиләнең һәр ағзаһына 12 110 һумдан артмаҫҡа тейеш), мөлкәт иҫәпкә алына.

✓Рәсәй Хөкүмәте эшмәкәрлеген туҡтатҡан ойошмаларҙың хеҙмәткәрҙәрен икенсе эшкә күсереү мөмкинлеген 2023 йыл аҙағына тиклем оҙайтырға ҡарар итте. Предприятие эшмәкәрлеген туҡтатыуға бәйле эш урынын юғалтыу ҡурҡынысы янаған граждандар ваҡытлыса икенсе ойошмаға эшкә күсергә мөмкин. Бының өсөн хеҙмәткәрҙән яҙма ризалыҡ һәм мәшғүллек үҙәгенең йүнәлтмә талап ителә. Был Рәсәйҙә ваҡытлыса ябылған, әммә кире ҡайтырға уйҙары булған компаниялар хеҙмәткәрҙәре өсөн көнүҙәк.

ҠЫҪҠАСА

# КҮП БАЛАЛЫЛАРҒА...

**Рәсәй Хөкүмәте "Герой-әсә" исемен алғандарға бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү өсөн 30,7 миллион һум бүлде. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.** "Ата-әсәлек даны" ордены йәки миҙалы менән бүләкләнгән граждандарға ла аҡсалата дәртләндереү ҡаралған. "2022 йылда ошондай түләүҙәр өсөн аҡса хөкүмәттең резерв фондынан күсә. 2023-2025 йылдарҙа әлеге түләүҙәр өсөн финанслау Хөкүмәт хуплаған федераль бюджет проектына һалынған", - тип билдәләнә белдереүҙә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Владимир Путин Рәсәйҙә "Герой-әсә" исемен булдырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны. Уның шарттарына ярашлы, 10 һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум күләмендәге түләү тәғәйенләнә. Бынан тыш, "Ата-әсәлек даны" ордены миҙалы менән бүләкләгәндә ата-әсәләрҙең йәки уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусыларҙың береһенә бер тапҡыр 200 мең һум түләнә.

✓ **Башҡортостандан һәм күрше төбәктәрҙән 300 кеше Салауат Юлаев исемендәге халыҡ батальоны составында махсус хәрби операцияла ҡатнашырға әҙер булыуын белдергән.** Был хаҡта отрядты ойоштороу башланғысы менән сығыш яһаған отставкалағы полковник Артур Йомағужин хәбәр итте. "Тиҙҙән беҙ артабанғы пландарыбыҙҙы иғлан итербеҙ һәм батальонда хеҙмәт итеү шарттары менән таныштырырбыҙ", - тип яҙҙы социаль селтәрҙә Йомағужин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда үҙ ирке менән махсус операцияла ҡатнашырға теләгәндәрҙән өсөнсө отрядын ойоштороу тураһында 30 сентябрҙә билдәле булды. Кандидаттарҙы хәрби тәжрибәһе булғандар араһынан һайлап алалар. Адресы: Өфө ҡалаһы, Дан бульвары, 6 (ДОСААФ).

✓ **Республикала ауыл тренерҙарына түләүҙәр 1 миллион һумға тиклем артты.** Башҡортостанда ауыл ерендә, эшсе ҡасабаларҙа һәм ҡала тибындағы ҡасабаларҙа, шулай уҡ 100 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларҙа спорт әҙерлеге менән шөғөлләнгән тренерҙарға 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләнә. Республика Хөкүмәте муниципалитеттарға төбәк ҡаҙнаһынан аҡса бүлеү тәртибенә тейешле үҙгәрештәр индерҙе. Компенсация 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң республиканың физкультура-спорт ойошмалары менән хеҙмәт килешеүҙәре төҙөгәндәргә түләнә. Бынан алда ауыл ерендә һәм башҡа бәләкәй тораҡ пункттарҙа эшләгән тренерҙар бер тапҡыр 600 мең һум күләмендә аҡса алды.

✓ **Башҡортостанда транспорт сараларын тәбиғи газға йыһазландырыу хоҡуғы алыу өсөн документтар ҡабул итеүә башланы.** Льготалар автомобилдәрҙе кирәнән йыһазландырыу менән шөғөлләнгән юридик шәхестәр, үҙмәшғүлдәр һәм шәхси эшҡыуарҙар өсөн ҡаралған. Уларға газ баллоны ҡоралмы һәм уны ҡуйып биреүгә сарыф ителгән аҡсаның 1/3 өлөшөнә тиклем субсидия бүлеү ҡаралған, тип аңлаталар Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы мәғлүмәт хеҙмәтендә. "Компенсация был тармаҡта эшләгәндәрҙең транспорт саралары хужаларына күрһәтелгән хеҙмәттәр өсөн ташламалар биреүгә бәйле алып еткермәгән килемдәрен ҡайтарыу маҡсатында түләнә", - тип хәбәр ителә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДҮРТ СУБЪЕКТ ӨҪТӘЛДЕ

**Ҙур Кремль һарайының Георгиевский залында Рәсәй составына яңы биләмәләрҙең инеүе тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу тантанаһы уҙҙы.**



Документҡа ҡул ҡуйыр алдынан Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй, Донецк һәм Луганск Халыҡ Республикалары, Запорожье һәм Херсон өлкәләре граждандарына мөрәжәғәт итте. "Федераль Йыйылыш Рәсәйҙә дүрт яңы төбәктең барлыҡҡа килеүен хуплар тип ышанам, сөнки был - миллиондарса халыҡтың ихтыяры, уларҙың айырылғыһыҙ хоҡуғы", - тине Владимир Путин.

Президент ДНР, ЛНР, Запорожье һәм Херсон өлкәләренең именлеген һаҡларға, инфраструктураһын тергеҙергә вәғәҙә бирҙе.

Килешеүгә Рәсәй Президенты Владимир Путин, ДНР башлығы Денис Пушилин, ЛНР башлығы Леонид Пасечник, Запорожье өлкәһе башлығы Евгений Балицкий һәм Херсон өлкәһе башлығы Владимир Сальдо ҡул ҡуйҙы. Хәҙер Рәсәй Федерацияһында дүрт яңы субъект барлыҡҡа килде.

# БИШ МИЛЛИОН ТОННА!



**Башҡортостанда иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларының уңышы 1980 йылдарҙан алып тәүге тапҡыр 5 миллион тоннаға еткән, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында.**

"Тарихта дүртенсе тапҡыр ошо сикте үтәбеҙ. 1983 йылда - 5 миллион тонна, 1985 йылда - 5,2 миллион, 1986 йылда иһә 5,9 миллион тонна иген йыйып алынһа, бына хәҙер 1980 йылдарҙан алып тәүге тапҡыр йәнә 5 миллион тонналыҡ сиккә еттек, - тип билдәләне ул. - Бындай юғары һөҙөмтәгә өлгәшергә беҙгә һауа торошо ярҙам итте - йәйҙең тәүге яртыһы иген һәм ҡуҙаҡлылар өсөн бик яҡшы булды, ләкин ул ғына ла түгел. Һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығына ҙур иғтибар бүлә башланыҡ. Ауыл хужалығы техникаһы паркын яңыртыу өҫтөндә эшләнек, аграрийҙарыбыҙ өҫ йылда 5 миллиард һумға яҡын субсидия алды. Шулай уҡ элиталы орлоҡ материалына һәм минераль ашламалар һатып алыуға киткән сығымдарҙы ҡаплауҙы дауам итәбеҙ. Әммә тәү сиратта мин иртә таңдан ҡара төнгә тиклем баҫыуҙа эшләгән игенселәргә рәхмәт белдерәм".

# УҠЫТЫУСЫЛАР БАЙРАМ ИТТЕ



**Республикала 42 меңдән ашыу педагог 5 октябрҙә Уҡытыусылар көнөн билдәләне. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡытыусыларҙы һәм педагогик хеҙмәт ветерандарын һөнәри байрамы - Уҡытыусылар көнө менән ҡотланы.**

Радий Хәбиров билдәләүенсә, хәҙерге заман уҡытыусыһы тәрән аҡыллылыҡ, түҙемлек кеүек сифаттарға, предмет компетенцияларына эйә булырға, даими рәүештә үҙенең оҫталығын камиллаштырырға тейеш.

Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала мәғариф өлкәһендә 116 мең хеҙмәткәр эшләй (хеҙмәткәрҙәр һанынан 11 процент). Уларҙың 33,1 меңе - мәктәп, 4,5 меңе - урта махсус, 4,7 меңе - юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары. Педагогтарҙың 92 проценты юғары белемле. Заманында белем биргән ҡатын-ҡыҙҙар аҙ ғына булһа, хәҙер улар был өлкәлә күпселек: 89 процент- мәктәптәрҙә, 79 процент - колледждарҙа, 59 процент юғары уҡыу йорттарында эшләй. Уҡытыусыларҙың 62 процентының 20 йылдан ашыу стажы бар. 40-59 йәшлек хеҙмәткәрҙәр ҙә шунса уҡ. 29 йәшкә тиклемге уҡытыусылар яҡынса 9 процент ҡына. Мәғариф өлкәһендә уртаса эш хаҡы 2021 йылда 35,8 мең һум самаһы (2020 йылда -33,9 мең һум, 2019 йылда - 32,5 мең һум) тәшкил иткән.

# "ТОРАТАУ" ГЕОПАРКЫНА КИЛЕГЕҘ!




**Башҡортостан Башлығы барыһын да "Торатау" геопаркына саҡырҙы. "Беҙҙең "Торатау" геопаркы республика халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн тағы ла күркәмерәк була бара", - тип белдерҙе ул социаль селтәрҙәге яңы яҙмаһында.**

"Геопарк Ишембай, Стәрлетамаҡ, Ғафури һәм Мәләүез райондары биләмәләренән үтә. Бында 155 тәбиғәт объекты, 27 махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе, 103 геологик һәм 126 тарихи-мәҙәни объект урынлашҡан. Төп иҫтәлекле урындар иҫәбендә - Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау, ике "алтын сөй" - "Көгөш" һәм "Алыҫ Төлкәс" геологик киҫелештәре. Барыһы ла халыҡ-ара әһәмиәткә эйә. Беҙ бында ғилми һәм белем биреү туризмын үҫтерәбеҙ, әүҙем, экстремаль һәм һауыҡтырыу ялы өсөн бик яҡшы урын. Шул уҡ ваҡытта уны һаулыҡ мөмкинлектәре сикле, аҙ хәрәкәт иткән кешеләр өсөн дә мөмкин тиклем уңайлы итергә тырыштыҡ. Айырыуса уңайлы навигация системаһын билдәләп үтергә теләйем. Биләмәлә мәғлүмәт стендтары ҡуйыуҙы дауам итәбеҙ. Торатау итегендә визит-үҙәк эшләй.

"Торатау" геопаркы беҙҙең бизнес өсөн дә ҡыҙыҡлы. Геопаркта 107 резидент-партнер бар, ә бер нисә йыл элек улар 16 ғына ине. Эшҡыуарҙар ҡунаҡ йорттары, турбазалар төҙөй, ҡунаҡтарҙы ҡаршы ала.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында барлыҡ балалар баҡсаларында тәүлек әйләнәһенә һаҡ ойошторолған. Өфө мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин белдереүенсә, баш ҡала мәктәптәрендә хәүефһеҙлек саралары көсәйтелгән. Уның һүҙҙәренсә, Өфөнөң барлыҡ 126 белем биреү ойошмаһында ишеккә электромагнит йоҙаҡтар ҡуйылған, видеокүҙәтеү алып барыла, килеүселәрҙең мәғлүмәттәре махсус журналда теркәлә, һаҡ тәүлек әйләнәһенә эшләй. Рәсәй гвардияһы менән төҙөлгән килешеүгә ярашлы, хәүеф төймәһе эшләй башлаған та, мәктәптәргә махсус отряд килеп етергә тейеш. Яҡын арала мәктәп биләмәләрендә лә иркенләп йөрөүҙе тыйырға уйлайҙар.

✓ Тиҙҙән Өфөлә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы ҡуйыласаҡ. 20 метрлыҡ стела төҙөкләндерелгән Ағиҙел ярының Сочи, Яр буйы урамдары, Салауат Юлаев проспекты киҫелеше тапҡырында урынлаштырыла. Подрядсы ойошма килешеү буйынса эштәрҙе 2022 йылдың 30 ноябрендә дә һуңға ҡалмай башҡарырға тейеш булһа ла, әле ваҡытынан алда тамамларға бар тырышлығын һала. Стела төндә яҡтырып торасаҡ, быныҡ өсөн махсус яҡтылыҡ сығанаҡтары ҡуйыла.

✓Октябрҙә Башҡортостан халҡын Республика көнө уңайынан өҫтәмә ял көнө көтә. 1992 йылдың 27 февралендәге "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһында"ғы төбәк законына ярашлы, 11 октябрь - Республика көнө ял тип иҫәпләнә. Быйыл 11 октябрь шишәмбегә тура килә. Тимәк, дүшәмбе, 10 октябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына ярашлы, йыллыҡ төп йәки өҫтәмә түләүле отпуск бирелгәндә 11 октябрҙәге байрам көнө отпусканың календарь көндәренә индерелмәй.

✓Рәсәй банкы Өфөгә нигеҙ һалыныуға 450 йыл тулыу айҡанлы иҫтәлекле тәңкәләр сығарырға йыйына. Баш ҡалабыҙҙың күркәм урындарын һайлау буйынса тауыш биреү башланған. Бәлки, шуларҙың береһе иҫтәлекле тәңкәне биҙәр. Тәҡдим ителгән варианттар араһында - Өфө кремле, Беренсе йәмиғ мәсете, Мостай Кәрим һәйкәле, "Ете ҡыҙ" фонтаны, Дуҫлыҡ монументы, Александр Матросов һәйкәле, Салауат Юлаев һәйкәле, шулай уҡ Өфө гербтары. Ошо варианттарҙың береһен "Бәйләнештә" һайларға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БҮЛӘКЛӘҮГӘ ЛАЙЫҠТАР

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы ултырышында Луганск һәм Донецк Халыҡ Республикаларында тергеҙеү эштәрендә ҡатнашыусыларҙы бүләкләнеләр.**

Мариуполь биләмәһендәге емереклектәрҙе бөтөрөүгә йәлеп ителгән белгестәргә, шулай уҡ Петровский ҡалаһында Миңлеғәли Шайморатов исемендәге 22-се мәктәпте реконструкциялаған төҙөүселәргә Маҡтау грамоталары тапшырылды.

- 19 августан 9 сентябргә тиклем 12 кешенән торған төркөмөбөҙ һәм бер нисә бөрәмек техника Мариуполдә емереклектәрҙе таҙартыу һәм төҙөлөш материалдарын ташыу менән шөғөлләнде. Бынан тыш, Башҡортостан эшселәре ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 400-гә яҡын уҡыусыға иҫәпләнгән белем усаҡтарын төҙөкләндерҙе. Яңыртылғандан һуң 22-се мәктәптең дөйөм майҙаны 7 мең квадрат метр самаһы тәшкил итте. Хәҙер бында заманса туҡланыу блогы, яҡшы кабинеттар, гардероб, китапхана, ашхана, ике спорт залы бар, - тип билдәләне баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев. Ул шулай уҡ Башҡортостандан саҡырылғандарҙың хәрби әҙерлек үткән урынында булыуы һәм яҡташтарыбыҙ менән осрашыуы тураһында һөйләне: "Пенза егеттәр менән осрашып, улар менән шәхсән аралаштым. Уларҙың һорауҙарын яҙып алдым", - тине Ратмир Мәүлиев.



ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# МУТЛАШЫУСЫЛАР ТОҘАҠ ҠОРА



**Өфө ҡалаһы прокуратураһы мәғлүмәт-телекоммуникация технологиялары өлкәһендә күҙәтелгән енәйәтселекте анализлап, хәл-тороштоң хәүефле булыуы тураһында белдерә.**

● Ҡулаҡсаһыҙ түләүҙәр, тауарҙарҙы интернет аша һатыу хәҙер киң таралды. Бер яҡтан был бик уңайлы булһа, икенсе яҡтан, криминал элементтар ҙа тик ятмай, улар ҙа граждандарҙың аҡсаларын урлауҙа заманса технологияларҙы оҫта ҡуллана. Ҡала прокуроры С. Воронов әйтеүенсә, Өфөлә киберенәйәтселек йылдан-йыл арта бара һәм йыл башынан ошондай 3 мең осраҡ теркәлгән. Бындай енәйәттәр бигерәк тә халыҡ араһында популяр булған "Avito" иғландар сайтына һәм интернет-магазиндарға тура килә, сөнки һатыусы тәҡдим иткән тауары өсөн картанан картаға аванс күсереүҙе йәки тулыһынса түләүҙе һорай, һәм аҡса күсеү менән юғала.

Йыл башынан алып баш ҡалала шундай юл менән 373 кешенең алданыуы теркәлгән. Шулай уҡ муттар социаль селтәрҙәрҙә лә әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Унда ла улар төрлө тауар тәҡдим итеп, күптәрҙе тоҙ башына ултырта. Баш ҡалала улар тоҙағына 104 кеше эләккән.

● Шулай уҡ граждандарҙың банк карталарынан аҡсаларын урлау менән бәйле енәйәтселек тә арта. Мәҫәлән, 1 сентябргә ҡарата ошондай 1 мең осраҡ теркәлгән. Уларҙың 80 проценты карта хужаларынан шәхси мәғлүмәт (банк карталары реквизиты, паспорт мәғлүмәттәре, логин, серһүҙ һ.б.) алыуға һәм артабан граждандарҙың аҡсаһын йәки башҡа милкен урлауға йүнәлтелгән. Бындай енәйәттәр бигерәк тә интернет селтәре, кәҫә телефоны һәм иҫәп карталары аша киң таралған.

Хаҡлы ялдағы һәм пенсия алдында торған категория бигерәк тә тиҙ ышанып барыусан һәм социаль йәһәттән яҡланмаған. Муттар уларҙың ошо ышаныусанлығын үҙ мәнфәғәтендә оҫта файҙалана ла инде. Улар үҙҙәрен йә банк хеҙмәткәре, социаль яҡлау хеҙмәткәре тип таныштырып, оло йәштәгеләрҙән шәхси мәғлүмәттәр ала һәм яуыз ниәтен тормошҡа ашыра. Шулай уҡ бындай ҡармаҡҡа үсмерҙәр ҙә тиҙ генә эләгеп бара.

● Телефондан шылтыратып, үҙен банк хеҙмәткәре тип таныштырып, клиенттың картаһынан шикле операция башҡарылыуы һәм хәүефһеҙлек системаһы эшләүе тураһында хәбәр итеү схемаһы бөгөн киң таралған. Йәнәһе, был операцияны туҡтатыу өсөн кодлы һүҙ йәки ПИН-код кәрәк. Артабан муттар психологик манипуляциялар ҡулланып, кешегә баҫым яһай, уларҙы иҫәп йәки карточка менән бәйле гәмәлдәр башҡарырға этәрә һәм граждан аҡсаһынан яҙғанын һиҙмәй ҙә ҡала. Бик йыш телефонға ошондай уҡ йөкмәткеле СМС-тар ҙа ебәрәләр.

● Телефондан шылтыратып, балаларының, яҡындарының юл-транспорт ваҡиғаһына эләгеүе һәм проблеманы хәл итеү өсөн аҡса күсерергә кәрәклеге тураһында хәбәр итеү ысулын ҡулланыусылар һаны ла арта. Ғәҙәттә, бындай осраҡта бәйләнеш сифаты насар була, кеше ҡапыл ишеткән хәбәрҙән стресс торошонда ҡалып, яҡынына тиҙ генә ярҙам итәм тип, аҡса күсерә. "Алдашыуҙарҙың төрөн һәм ысулдарын анализлау күрһәтеүенсә, күпселек осраҡта енәйәтселәр граждандарҙың наҙанлығы һәм ышанып барыусанлығы менән файҙалана", - ти прокурор С. Воронов.

Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа, телефондың һәр шылтыратыуын өмөт ҡатыш хәүеф менән көткәндә, мутлашыусылар тоҙағына эләкмәҫмен тип бер кем дә әйтә алмай. Әммә һаҡлағанды Хоҙай һаҡлай, шуға уяулыҡты һәм иғтибарҙы юғалтмайыҡ, йәмәғәт!

РЕСПУБЛИКА КӨНӨ МЕНӘН!



# ҺӘЙКӘЛ АСЫЛА

**Республика көнө байрамы алдынан Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы социаль селтәрҙәрҙә "Өфө Башҡортостан Республикаһы көнө менән ҡотлай" тип аталған флешмобта ҡатнашырға саҡыра. Уның төп маҡсаты - илһөйәрлек, Башҡортостанға һәм уның баш ҡалаһына һөйөү тәрбиәләү.**

Сарала ҡатнашыу өсөн 10 октябргә тиклем 1 минутлыҡ видеоролик яҙҙырып, уны "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге сәхифәгеҙгә урынлаштырып, @kulturaufa тип билдәләргә һәм #УфаПоздравляетСднемРБ хештеген ҡуйырға кәрәк. Видеороликтың Өфөнөң танылған урынында төшөрөлөүе шарт. Йомғаҡ 13 октябрҙә яһаласаҡ.

- 5 октябрҙә киске сәғәт 5-тә Өфө балалар филармонияһында ижади коллективтарҙың концерты булып үтте. Шул уҡ көндө Нуғай ауылы мәҙәниәт йортонда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли биҙәүесе - селтәр эшләү буйынса "Милләт байлығы" тип аталған оҫталыҡ дәресе ойошторолдо.

- 6 октябрҙә Өфө ҡала хакимиәтенең Ҙур залында баш ҡала предприятиелары һәм учреждениеларының иң яҡшы хеҙмәткәрҙәре тәбрикләнде.

- 7 октябрҙә Ҡала мәҙәни-күңел асыу үҙәгенең Ҙур залында ижади коллективтарҙың концерты булды.

- 11 октябрҙә баш ҡала артистары С. Юлаев, Ш. Бабич һәйкәлдәренә сәскәләр һалыу, шулай уҡ Совет майҙанында М. Шайморатов һәйкәлен асыу тантанаһында ҡатнашасаҡ.

- Өфө ҡала планетарийында көндөҙгө сәғәт 1-ҙә, 3-сө яртыла һәм 4-тә уйын программалары, конкурстар һәм викториналар ойошторола.

- Бөтә Рәсәй һуҡырҙар йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе тарихы музейы ойоманың уҡыуетештереү предприятиелары әйберҙәренең күргәҙмәһенә саҡыра. Ул эш көндәрендә иртәнге сәғәт 10-дан киске 6-ға тиклем эшләй.

- Балалар музыка мәктәптәрендә тематик сәғәттәр, уҡыусылар концерттары, баш ҡала китапханаларында китап, фото күргәҙмәләре, уйын программалары һәм квиздар, осрашыуҙар, шиғриәт саралары үтә.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**БР Мәғариф министрлығы менән ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан Республикаһы комитеты Республика көнөнә һәм Рәсәйҙә халыҡтарҙың мәҙәни мираҫы йылына бағышлап "Урал батыр" эпосын һөйләү буйынса флешмоб ойоштора. Унда теләгән кеше ҡатнаша ала. Бынең өсөн 12 октябргә тиклем эпосты республикала йәшәгән халыҡтар телдәрендә һөйләп, 45 секундлыҡ видеороликты "Бәйләнештә" социаль селтәрендә үҙ сәхифәндә урынлаштырырға һәм #УралБатыр_2022 #ДеньРеспубликиБашкортостан_2022 хештегтары менән билдәләргә кәрәк. Ойоштороусылар сағыу сығыштарҙы һайлап алып, социаль селтәрҙәрҙә һәм киң мәғлүмәт сараларында таратасаҡ.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Хәтерҙе яҡшыртыу

❖ Банкаға 100-әр грамм ваҡланған ромашка һәм шинмәүгәл сәскәләре, ҡайын бөрөһө һалып болғап, йыйм ҡапҡас менән ябырға. Кискеһен ошо әҙерләмәнең 1 ҡалағын алып, өҫтөнә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Шунан 1 ҡалаҡ бал ҡушып, тағы ла 20 минут төнәтергә. Йоҡлар алдынан төнәтмәнең яртыһын эсергә, шунан башҡа бер нәмә лә ҡабул итмәҫкә. Ҡалған яртыһын иртәнсәк ас ҡарынға, ашарҙан 30 минут алда эсергә. Был рәүешле әҙерләмә бөткәнсе дауаланырға.

❖ 100 грамм яңы йәки 30 грамм киптерелгән андыҙ тамырына 500 мл араҡы ҡойоп, 40 көн төнәтергә. Төнәтмәне ашарҙан алда 25-әр тамсы эсергә. Тулы дауаланыу курсы үтеү өсөн 1,5 литр араҡы кәрәк буласаҡ.

❖ Ҡалаҡ ярым һут сығырлыҡ итеп һуғанды ваҡ ҡырғыстан үткәрергә. Шунан был һуған һутын 1,5 ҡалаҡ бал менән бутарға. Ашарҙан 1 сәғәт алда, йәки ашағандан 2-3 сәғәт үткәс, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 1 баш һарымһаҡты буткаға әйләндереп ҡырырға һәм быяла һауытҡа һалырға. Өҫтөнә 1 стакан таҙартылмаған (нерафинированный) көнбағыш майы ҡойоп, һыуытҡыстың аҫҡы кәштәһенә ҡуйырға. Икенсе көнөнә лимондың һутын һығырға. 1 балғалаҡ лимон һутына 1 балғалаҡ һарымһаҡлы майҙы ҡушып болғарға һәм йоторға. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда шулай ҡабул итергә. Был рәүешле 1 айҙан 3 айға тиклем дауаланырға мөмкин.

## Аяҡтар һыҙлағанда

❖ Һаҙанаҡ (багульник) ботаҡтарын сөгөнгә һалып, өҫтөнә сығарғансы һыу ҡойорға. Шуны мейестә яҡшылап быҡтырырға. Һаҙанаҡты ул бешкән һыу ҡара төҫкә инергәк күләмдә алырға кәрәк. Шунан ваннаға ҡойорға һәм һыу өҫтәргә. Ваннаға ултырғанда һыу билдән өҫтәрәк булырға тейеш. Йоҡағыраҡ юрған ябынып, 30-40 минут ултырғас, ваннанан сығып, шунда уҡ йоҡларға ятырға. Был рәүешле 10 тапҡыр дауаланыу ҙа аяҡтар һыҙлауын бөтөрә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Киләсәктә ундай хаталар ҡабатланмаһын, тигән йәмғиәт кисектергеһеҙ сараларын күрергә бурыслы. Сөнки йәштәре тырым-тырағай йөрөгән илдең эштәре уңышлы, йәшәйеше данлы, киләсәге хәүефһеҙ булыуына ышаныс аҙ...*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Урал буйының Ағиҙел аръяғында урынлашҡан районларында XIX быуат аҙағы - XX быуат башында күтәренке һырлы тояҡлы туҫтаҡ рәүешендәге бал менән һыйлау өсөн тәғәйенләнгән махсус һауыттар киң тарала. Ғәҙәттә, һауыттың төбөн дүңгәләк "тояғы" менән тоташтырған дүрт таяу ҡыялап төшкән. Ҡайһы берҙә туҫтаҡ һәм аҫлыҡты бормаланып торған таяуҙар тоташтырған. Һауыт тышҡы яҡтан бормалы ағас дүңгәләк йәки тамсы рәүешендәге ҡырланған суҡтар ярҙамында биҙәлгән. Һауыттың үҙенә һәм уның "тояҡ"-аҫлығына киҫелешеп киткән зигзагтарҙан ҡыя шаҡмаҡтар рәүешендәге орнамент төшөрөлгән. Бал вазаларын Түбәнге Ташбүкән ауылында эшләгәндәр. Ғафури һәм Ишембай районларында боронғо был һауыттарҙы "түңгәләк", "суҡлы сеүәтә", "бал һауыты" тип йөрөткәндәр һәм улар бөгөн дә осрай. Улар музейҙарҙа ла күп һаҡланған. 1906 йылда бындай суҡлы сеүәтәләрҙең төрлө ҙурлыҡтағыларын Рус музейы өсөн С.И. Руденко Түбәнге Ташбүкәндә һатып алған.



*Суклы сеүәтәләр. 1 - Ғафури районы Түбәнге Ташбүкән ауылынан, 2 - Ишембай районы Ҡолғона ауылынан. Рәссамы В.М. Шутова*



*Бал һауыты һәм ҡымыҙ ижауы. РЭМ фондынан. XX быуат башы. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

Элек бөтә аш һауыттары ла ағастан эшләнгән. Фольклор һәм әҙәби сығанаҡтарҙа ағас һауыт-һаба йыш телгә алына. "Әүеш күл" легендаһында иртә менән Хәсән хан тирмәһе алдында "кейеҙҙәр түшәп, зауыҡлы һырланған туҫтаҡтар ҡуялар; нығ алыҫ та китмәй ут яғалар..." тип бәйән ителә. "Алдар менән Зөһрә" эпосында һәр табын ҡымыҙ тәпәндәрен, туҫтаҡтарын һәм башҡа һауыт-һабаны сығарыуҙан башлана. Алдар иптәше менән оҙон юлдан арып ҡунаҡ тирмәһендә урынлашҡас та, улар яғына "хужабикә ҙур бирес табаҡта туралған ит индерҙе..." Икенсе осраҡта "ике йәш егет... тәпән менән ҡымыҙ алып килделәр, уны бирес туҫтаҡҡа ҡойҙолар". Тәпән булмағанда ҡымыҙҙы тамырҙан соҡоп эшләнгән тәрән туҫтаҡтарҙа - "аяҡ"та биргәндәр, хөрмәтле ҡунаҡтарҙы һыйлаған йәштәрҙе "аяҡсылар" тип йөрөткәндәр.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# КЕМДЕҢ АРБАҺЫНДАҺЫҢ?

## Заман арбаһында!

**Замана кисергәндәрҙе кисерә, башҡалар күргәнде күрә, тулай, илай, көлә, хисләнә, ҡайғыра, шатлана, ялағайлана, ярамһаҡлана, тұҙә лә, дәүеренә, көнөнә яраҡлашып йәшәй әҙәм балаһы. Бөтә өҫтөнлөктәре лә, етешһеҙлектәре лә шул йәшәгән заманына хас, сөнки "кемдең арбаһына ултырһаң..."**



Донъялар һынылыш, һынамыш кисергәндә, әҙәмдәр ҙә төрлө ҡиәфәткә инеп, төрлө хисиәттәр кисереп, йәшәгән дәүеренә, мөхитенә яраҡлашып, уларҙың һәр үҙгәрешенә шәхсән мөнәсәбәтен күрһәтә. Шул мөхиттә тыуған камил йәнле, аңлы, тәнле бала ла, үҫә бара, эргә-тирәһендәге йәшәйеште өйрәнә, яраҡлаша, тәжрибә туплай, өлкәндәрҙә булған бөтә яҡшылыҡты, яманлыҡты ла үҙләштерә һәм үҙгәрә. Ниндәй ғәҙәт, һәләттәрҙе күберәк үҙләштерә ул, ҡайһы яҡҡа нығыраҡ үҙгәрә, уныһы инде ата-әсә, мәктәп тәрбиәһе, йәмғиәттәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙән, йәшәү шарттарынан тора.

Был донъяға килгәндә бер кемгә лә тормош тәжрибәһе, йәшәйеш ҡағиҙәләре бирелмәй. Ҡыйыулыҡҡа, ҡурҡаҡлыҡҡа, тоғролоҡҡа, хыянатҡа, ғөмүмән, бөтә әҙәми сифаттарға ла бала атаәсәһенән, өлкән быуын тәжрибәһенән генә өйрәнә ала. "Кәкре таяҡтың күләгәһе лә кәкре" тигән кеүек, йәштәр ниндәй шарттарҙа, ниндәй ҡағиҙәләргә буйһоноп, кемдәрҙән өйрәнеп, үрнәк алып үҫә, шул шарттарға, ҡағиҙәләргә яраҡлашып, шул кешеләргә оҡшап йәшәргә мәжбүр була. Тыумыштан бер кем дә боҙоҡ булмай. Әгәр махсус шарттар тыуҙырып тәрбиәләгәндә, өлкән быуын тәжрибәһен белмәй үҫкән йәш быуын ниндәй яңы кешелек сифаттарына эйә булыр ине икән?..

Хәҙерге тәрбиәлә ҡәтғи сиктәр юҡ саҡта яҡшылыҡта, игелеклектә, итәғәтлектә үрнәк алырлыҡ, тиңләшерлек өлгөләр ҙә юҡ кимәлендә. Үҙен һаҡлау юлын һәр кем үҙе һайлай, имен ҡалыу ысулын үҙе хәстәрләй. Һәр кем үҙ яйына ҡуйылған: нисек теләйһең, нисек хәлеңдән килә, шулай йәшә! Уңһаң, афарин! Уңмаһаң, ул һинең генә бәләң! Шулайтып, тарҡау йәмғиәт үҙ ағзаларын ситкә тибә, йәш быуынын аяуһыҙ һынауҙарға дусар итә. Һөҙөмтәлә...

Ысынында, йәштәр бөгөн ҡойон ыңғайына өйөрөлөп йөрөгән ҡоро япраҡ өйкөмө кеүек, ҡайҙа һуғылырға белмәй, эркелешеп йөрөйҙәр, дөйөм идеяһыҙ, уртаҡ маҡсатһыҙ еңел генә берләшәләр, тупланалар, шулай уҡ еңел генә тарҡалалар, икенсе көслөрәк өйкөмдәргә күсәләр. Илдә берәй бола ҡупһа, донъяны ҡыйратып йөрөүселәр, ғәҙәттә, шул уртаҡ идеяһыҙ, уртаҡ маҡсатһыҙ, ләкин дөйөм ярһыу хисенә бирелгән йәштәр төркөмө була. Уларҙың һәр береһе шәхсән тормош мәсьәләһен хәл итә: кемдәргәлер, нимәгәлер ризаһыҙлығын белдерә, асыуын сығара, күңелен тынысландыра. Улар уртаҡ ярһыуға бирелгәндәр, ә уртаҡ маҡсаттары юҡ. Шуға ла үс, нәфрәт, дәғүә, асыу хистәрен сығарып бөтөү менән ярһыуҙары үҙенән-үҙе һүрелә. Ә йәштәрҙең тотанаҡһыҙ ярһыу хистәре кем тарафынандыр яуыз маҡсатта бер йүнәлештә, бер күскә берләштерелһә? Бындай хәлдәр ҙә булып тора бит.

Элегерәк йәш быуындың энергияһын файҙалы юлға һалыу өсөн улар төрлө фестиваль, конкурс, ярыштарға ылыҡтырылып, шунда дөйөм идеяға, уртаҡ маҡсатҡа йүнәлеш бирелеп, аң һәләте, тән көсө, йән дәрте ижадҡа, тәжрибә туплауға, шәхестең аҡыл, йән, тән мөмкинлектәрен үҫтереүгә файҙаланылды. Эшсе йәштәр ил масштабындағы завод, комбинат, гидро-, электростанциялар, тимер юлдар һ.б. төҙөлөштәргә саҡырылып, ижади, һөнәри һәләттәрен асыуға, һәр кем үҙен танытыуға, таланттары баһаланыуға, орден, миҙалдар, маҡтаулы исемдәр яулауға шарттар тыуҙырылды. Фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтеп, иптәштәре алдында ихтирам, абруй яулағандар дан ҡаҙанып, рухи ҡәнәғәтләнеү алды.

Хәҙерге йәштәрҙең ташып барған энергияһын дөрөҫ йүнәлештә, шәхсән ихтыяждарын һәм йәмәғәт мәнфәғәттәрен ҡәнәғәтләндереүгә файҙаланып буламы? Булһа, нисек һәм ҡайҙа? Бөйөк төҙөлөштәр юҡ. Эш урындары етешмәй. Булған хәлдә лә, һәр кемгә һайлаған һөнәре буйынса эш табыу еңел түгел. Магазинда һатыу итеп, компьютер эргәһендә ултырып йәки ваҡ-төйәк йомошсо булып, кемделер хеҙмәтләндереп йөрөүҙән, яратмай эшләгән эштән рухи ҡәнәғәтләнеү алып буламы? Уларҙы бит шул хеҙмәткә генә һәләтле тип эшкә алалар. Йәштәр шул эш урындарына ла ҡушҡуллап ризалашалар. Белеме, һөнәре буйынса эш булмағас, ни хәл итһендәр?

Эйе, "Үҙ эшеңде ас та, алға!" тигән лозунгты йыш күтәрәләр. Әйтеүе генә анһат! Был бит шул уҡ, үҙ йүнеңде үҙең күр, тип, уларға ҡул һелтәү. Фәрештә булып күренер өсөн шайтан ҡойроғон йәшереп йөрөй, ти. Йәмғиәт тә шулай ҡылана түгелме? Яңы эш башлау өсөн иң алда тәғәйен шарттар тыуҙырылыуы мөһим бит. Бөгөн кем ҡаҡ ерҙә үҙ хәләл көсөм менән үҙ эшемде асып, йәмғиәткә файҙа килтерәм, ғәҙел табыш алып, хеҙмәтсәндәремдең мәнфәғәттәрен хәстәрләп, ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп, намыҫлы йәшәйем, тип әйтә ала?

1991-1992 йылдарҙағы капиталистик революция "Көслөнөкө - замана" тигән сәйәсәт өҫтөнлөгөн урынлаштырҙы. Шул йылдарҙа тыуып, тәрбиә, иғтибарға мохтажлыҡ кисереп йәшәгән балалар ата-әсәләренең, ғаиләмде туйындырам, донъя көтәм, кешесә йәшәйем, тип ҡыланған-ҡылғандарын күреп үҫте. Намыҫлы эшләп тапҡанға ғына әллә нимә ҡыйратып булмай икәнен аңланылар. Әҙәмсә йәшәр өсөн урлап, талап табыу ҙа оят түгел икәнен белделәр. Сөнки ул мәлдәрҙә етеш тормош кисергәндәр нисек байығанын, ҡайҙан, нимә урлағанын йәшермәне лә, ҡурҡманы ла. Ҡурҡманылар, киреһенсә, үҙҙәрен был тормоштоң хужалары итеп таныттылар.

Бала ата-әсәһенең көҙгөһө. Шәүләм оҡшамай тип, көҙгөнө ғәйепләү көлкө! Хәҙерге үҫмерҙәр үткән быуаттың 60-70-се йылдарында тыуып, пионер, комсомол сафтарында тәрбиәләнгән, 1991-1992 йылдарҙа ялған сәйәсәткә алданып, өмөтлө, ышаныслы киләсәктәренән яҙған атай-әсәйҙәрҙең балалары. Атай-әсәйе тыуҙырып үҫтергән, ләкин йәмғиәт тәрбиәләгән үҫмерҙәр. Бәлки, ҡурҡыныс күрәҙәлектер, ләкин улар ҙур төркөмдәргә үҙаллы берләшһә, йәмғиәт именлегенә янаған хәүеф күп тапҡырҙарға артасаҡ. Уларҙың кемдәрелер секталарҙа, бандаларҙа, кемдәре спорт йәмғиәттәре битлеге аҫтында йәшеренгән сәйер ойошмаларҙа, кемдәрелер башҡа төрлө байраҡтар аҫтында тоғролоҡҡа ант итәләр. Был ҡылыҡтары өсөн уларҙы ғәйепләү ғәҙел түгел, сөнки тәбиғи асылын һаҡлау инстинкты һәр тере йән төрөн берләшергә мәжбүр итә.

Нимә эшләргә, ҡайҙа һуғылырға, кемгә ылығырға, кемгә таянырға, кемгә ышанырға белмәй аптыранып йөрөгән йәш кеше, кем әҙ генә киләсәккә өмөт бирә, шуға ылыға, кем саҡ ҡына йылы һүҙ әйтә, ярҙам ҡулын һуҙа, шуға эйәрә. Ә йәмғиәт уларға нимәлер вәғәҙә итеү түгел, үҙенә ышандырып, өмөтләндереп тә маташмай. Өлкәндәрҙең ошо хәлгә битарафлығы ғәжәпләнерлек. Йәштәрҙе яҙыҡ юлдан ҡурсалау саралары күреү урынына, уларҙы эҙәрлекләү, язаға тарттырыу ысулдары камиллаштырыла. Йәмғиәт йәш быуынды тәрбиәләү мәсьәләһен хәл итмәй тороп, киләсәккә бер ышаныслы аҙым да яһай алмаясаҡ!

Эйе, халыҡ һүҙе хаҡ: алданам тигәнде алдауы ла рәхәт, алдаусыһы ла табыла! Элегерәк ауылға "баба" килһә, малайҙарҙы сөннәткә ултыртыр өсөн ҡуянат бирәм тип алдаштыра торғайны. Ә хәҙерге "баба"лар бөтә ил халҡын ҡуянат биреп тә тормай, сөннәткә ултырта ла китәләр...

Эйе, өлкәндәр үҙ файҙаһын, үҙ уңайлыҡтарын хәстәрләй белә. Донъя бөгөн улар ҡулында. Уларҙың тормоштан алған тәжрибә һабаҡтары күберәк. Ләкин ошо намыҫҡа, итәғәтлеккә ҡытлыҡ дәүерендә үҫкән балалар иртәгә тормош эйәләренә әйләнәсәктәр. Донъя дилбегәһен үҙ ҡулдарына алғас, улар нимә ҡылырҙар, ҡайҙа бороларҙар? Өлкәндәргә, донъяға асыуҙарының ҡоһорон ҡайҙа сығарырҙар? Аяуҙы белерҙәрме? Әллә, һеҙгә шул кәрәк, тип, тере йәндәр өҫтөнән тапап барырҙармы?

Халыҡ бушҡа ғына "Олоған эт тешләмәй, аҫтыртын эттән һаҡлан" тимәгәндер. Донъяла хәүефле хәлдәр булып тороусан. Дәүеребеҙҙәге киҫкен үҙгәрештәр мәлендә тыуған балалар үҫеп етте. Уларҙың башбаштаҡлыҡтары имен-аман үтеп китһә, киләсәктә ундай хаталар ҡабатланмаһын, тигән йәмғиәт кисектергеһеҙ сараларын күрергә бурыслы. Сөнки йәштәре тырым-тырағай йөрөгән илдең эштәре уңышлы, йәшәйеше данлы, киләсәге хәүефһеҙ булыуына ышаныс аҙ...

Һәр быуын йәшәгән дәүерендә маҡтанырлыҡ та, хур булырлыҡ та эштәр ҡыла. Ләкин Рәсәй тарихында, хәҙергеләр кеүек, үҙ яҙмышына был хәтлем еңел ҡараусы быуын булмағандыр. Дөйөм идея, берҙәм маҡсатта йәшәгәндәр генә ышаныслы, бәхетле киләсәккә өмөтләнә ала. Үткәндәренән фәһем алып, бөгөнгөһөнә инанып, киләсәген уйлап, әҙәпле, итәғәтле йәшәгән халыҡ лайыҡлы тормош кисерә, күпкә өлгәшә, ихтирам яулай!

**Урал МОСТАФИН.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.

#### Арҡайым тибындағы ҡаласыҡ-ҡәлғәләр

Бронза эпохаһында Көньяҡ Уралда тәү башлап яңы типтағы ҡомартҡылар - ур һәм оҙон соҡорҙар менән уратылып алынған ҡаласыҡ-ҡәлғәләр барлыҡҡа килә. Ошо типтағы ҡомартҡыларҙан иң тәүҙә Силәбе өлкәһенең көньяғында, Һынташты йылғаһы буйында Һынташты комплексы (ҡаласыҡ-ҡәлғә, ҡәберлек) ҡаҙып асылған (уны асыусы - күренекле совет археологы В.Ф. Генинг). Унан һуң Г.Б. Зданович етәкселегендә Силәбе дәүләт университеты ғалимдары Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Башҡортостан сиктәрендәге ҙур территорияла ҡаласыҡ-ҡәлғәләр серияһын асыуға өлгәште (Аҙаҡтан ошо территория "Ҡалалар иле", тип атала башланы. - **Тәрж. иҫк.**). Донъя фәне Һынташты-Арҡайым төркөмө ҡомартҡыларын асыуҙы һәм тикшереүҙе, табылған материалдарҙы ғилми әйләнешкә индереүҙе Көньяҡ Уралдың боронғо тарихын өйрәнеү өлкәһендә өлгәшелгән оло ҡаҙаныш итеп таныны.

Уҡыусы ошо ҡомартҡылар хаҡында Арҡайым ҡаласыҡ-ҡәлғәһенә арналған баҫма материалдар буйынса яҡшы мәғлүмәтле. Арҡайым ҡаласыҡ-ҡәлғәһе Силәбе өлкәһендә, Сибай ҡалаһынан 60-70 саҡрым тирәһендә урынлашҡан. Ул бер-береһе эсенә индереп төҙөлгән ике һаҡ (оборона) ҡоролмалары ҡуласаһынан хасил булған, унда майҙаны 200 кв. метрға тиклем еткән торлаҡ бинаһары һәм цитадель була. Һаҡ ҡоролмалары стеналарының ҡалынлығы 4,5 - 6 м тәшкил итә. Тышҡы һәм эске һаҡ ҡоролмалары яндырылмаған кирбес, ағас һәм кәҫтән торған диуарҙар, шулай уҡ оҙон соҡор (канау) менән сикләнгән. Тышҡы һәм эске ҡәлғә стеналары араuығы тотошлайы менән 4х12 м ҙурлығындағы ярым ер өйҙәрҙән тора. Өйҙәр радиаль йүнәлештә төҙөлөп, уларҙың ике оҙон стенаһы бер үк ваҡытта йәнәштәге бүлмәләрҙең дә стеналарын хасил иткән. Торлаҡ стеналары һәм ҡыйыҡтары ер иҙәнгә ҡаҙып ултыртылған бағаналар менән тотторолған. Һәр өйҙә ике инеп-сығып йөрөү урыны була. Береһе тышҡы стенаның бер мөйөшөндә булһа, икенсеһе киңлеге 6 м булған ағас түшәлгән юл менән тоташтырылған эске ихата яғына сыға. Ағас түшәлгән урам (мостовой) аҫтынан канализация системаһы үтә. Өйҙәр иҙәндәге усаҡтар менән йылытыла; һәр бер өйҙә ҡойо, һыу ағыҙыу торбалары була. Хәҙер беҙ Көньяҡ Уралдың Арҡайым тибындағы ҡаласыҡ-ҡәлғәләре тирәләй иҙәндәрендә усаҡтары һәм тәрән ҡойолары булған дүрт мөйөшлө ярым ер өйҙәрҙән торған асыҡ торлаҡтар булыуы хаҡында ышаныслы итеп әйтә алабыҙ.

1995 йылда БР Фәндәр академияһының комплекслы археологик экспедицияһы Башҡортостандың Хәйбулла районында, Таналыҡ ауыл биләмәһе территорияһында 10-дан ашыу ошондай торлаҡ ҡалдыҡтарын тикшерҙе. Конструкцияһы һәм табылдыҡтар составы буйынса улар Арҡайым торлаҡтары менән бер иш.

Көньяҡ Уралдың иртә бронза эпохаһына ҡараған ҡаласыҡ-ҡәлғәләрен тикшереү яңыраҡ башланғанлыҡтан, уларҙың барлыҡҡа килеүе һәм йәшәүе менән бәйле күп мәсьәләләр асыҡланмаған көйө ҡала. Әммә Арҡайым ҡаласығында оҙаҡ йылдар дауамында алып барылған ҡаҙыныу эштәре материалдары бындағы ҡомартҡыларҙың үҙҙәренең түңәрәк планировкаһы, фортификацион һәм бәләкәй ҡоролмаларҙың ҡатмарлы булыуы, төҙөлөштә яндырылмаған кирбестең киң ҡулланылыуы менән ғәҙәти булмауы хаҡындағы фекерҙе раҫларға нигеҙ була ала. Улар формалары буйынса боронғо Хорезм, Бактрия һәм Урта Азияның башҡа дәүләттәренең ҡала-ҡәлғәләрен нығ хәтерләтә, әммә Арҡайым тибындағы ҡомартҡылар быларынан 600 - 800 йылға боронғораҡ. Әйтергә кәрәк, планировкаһы, төҙөлөш техникаһы һәм табылдыҡтар составы (балсыҡ көршәктәр, бронза бысаҡтар) буйынса тулыһынса оҡшаш булған ҡаласыҡ-ҡәлғәләр Сирияның әлеге ваҡытта



Израиль тарафынан оккупацияланған Голан ҡалҡыулыҡтарында табылған. Был ҡаласыҡтар америка спутниктары ярҙамында асылып, Израиль археологтары тарафынан өйрәнелгән, ҡаҙыныу һөҙөмтәләре Израиль журналдарының береһендә тулыһынса баҫылып сыҡҡан. Көньяҡ Уралдың Арҡайым тибындағы ҡаласыҡ-ҡәлғәләренең Голан ҡалҡыулыҡтарындағы әле иҫкә алынғандары менән оҡшашлығы иҫ китмәле, һәм был аңлатыу талап итә. Беҙгә килгәндә, үрҙәрәк телгә алынғанса, иртә бронза эпохаһында (III - II мең йыллыҡтар сиктәрендә) Көньяҡ Уралға көньяҡ далаларынан Яҡын Көнсығыш халыҡтары менән тығыҙ мәҙәни-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙә йәшәгән ҙур халыҡ төркөмдәре күсеп килә. Сағыштырылған төбәктәрҙә йәшәүсе ҡәүемдәрҙең ошондай аралашыуы өсөн бик яҡшы мөмкинлектәр булған: улар тәгәрмәсле транспорт - ике тәгәрмәсле арбаларҙы ҡуллана алған, был хаҡта түбәндәрәк бәйән ителер.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

БЕР ФОТО ТАРИХЫ

# АТАЙ СЕРЕ

1939 йыл. Был фотоһүрәткә төшөү тарихы теүәл генә билдәле түгел. Шулай ҙа ундағы кешеләр иң яҡшы кейемдәрен кейеп, өҫ-башын тәрбиәләп алып, арбаға тейәлешкәндәрҙер ҙә, юлға сыҡҡандарҙыр, тип күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Дилбегә тотҡан атайҙары эргәһендә малайҙар юл буйы шаярып килгәндер. Бына шулай колхоз умартасыһы Хәтмуллин Лотфулла улдары Зәйнулла (уң яҡта тора), Ғәйнулла (һул яҡта ултыра), Фәйзулла (уң яҡта ултыра) һәм күрше малайы, туған тейеш Таҫмағолов Сафуанды фото төшөргә алып бара.




Фотограф, моғайын, "Хәҙер ҡошсоҡ осоп сыға", тигәндер. Улар шуны түҙемле генә көтөп, тыныс 1939 йылдан был фото аша беҙгә баҡҡандар. Әммә ошо мәлдә Европа йөрәгендә улар өсөн ҡурғаш иретелә. Быныһы беҙгә билдәле, ә уларға - юҡ.



1923 йылда тыуған Зәйнулла 1942 йылда фронтҡа киткән. Лотфулла бабай улын оҙатҡанда күҙенә йәш алып, уға үҙенең бер серен аса. Ул Империалистик һуғыш мәлендә пленға төшөп, Германияның бер ҡалаһында бай бюргерға ялсы булып эшләгән. Шунда немец ҡыҙына ғашиҡ була, ике улдары тыуа. Әммә тыуған яғын һағыныуына түҙә алмай, ир ҡайтып килә һәм тормошоноң был осоро тураһында береһенә лә һөйләмәгән була. Атаһының ошо сере менән һуғышҡа киткән Зәйнулла 1944 йылдың 10 февралендә Беларусь ерендә башын һала. Ә бына ике кесе малайҙы яҙмыш һуғыш дәһшәтенән аралай, әммә улар тылдағы барлыҡ ауырлыҡтарҙы үҙ иңдәрендә кисерә. Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн иртә өлкәнәйергә, бәләкәйҙән эшләп үҫергә тура килә уларға. Фотоға ҡарап, ошо тарихты иҫләнем.

**Рәфҡәт ХӘМӘТУЛЛИН.**

**Редакциянан:** *Рәфҡәт Хәмәтуллиндың"Бәйләнештә"ге сәхифәһенән алдыҡ был матур хәтирәне. Бында һөйләнгән ғаиләнең Мәсетле районы Яңы Мөслим ауылынан булыуын белдек. Лотфулла Хәтмуллиндың империалистик һуғыштағы һалдат сағын һүрәтләгән фотоһын да тәҡдим итәбеҙ һеҙҙең иғтибарға һәм ошондай ҡыҙыҡ ваҡиғаларҙы, яҙмыштарҙы сағылдырған фотоларҙы башҡа уҡыусыларыбыҙҙан да көтәбеҙ. Әйҙәгеҙ, "Бер фото тарихы" рубрикаһына.*

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Днепр ярындағы урманда саперҙар тиҙ арала ағастарҙан паромдар (һалдар) эшләй. Беренсе төркөм десантсылар өсөн ҙур паром һәм вағыраҡ һалдар әҙерләнә. Урындағы халыҡ та ярҙамға килә: кешеләр бүрәнә, таҡта ташый, ихаталарындағы мискәләрҙән, ҡапҡаларынан, бау-арҡандар менән бәйләп, һал яһай. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙур тоҡтарға һалам, бесән тултырып килтерә. Тиҙ арала 53 һал эшләнә, ауыл кешеләренең 17 кәмәһе ремонтлап бирелә. Ошо ҡорамалдар көсәйтелгән бер эскадронды йылға аша сығарыу мөмкинлеген бирә. Һалдарҙы кире сыҡҡанда ағымға ҡаршы тартып тороу өсөн бауҙар, шулай уҡ ишкәк һәм кәртәләр әҙерләнә.

Днепрҙың уң ярында дошман позицияларын атакалап, тәүге плацдарм алыу маҡсатында 58-се атлы полк дивизияның ғына түгел, тотош корпустың алдынғы отряды итеп тәғәйенләнә. Ошо полк яугирҙары боевой әҙерлек, ойошҡанлыҡ һәм дисциплина яғынан, яуҙарҙа сыныҡҡандарҙың күп булыуы менән башҡаларҙан айырылып тора. Уларҙың командиры Таһир Кусимов та үҙенең хәрби белеме һәм командирлыҡ сифаттары яғынан ҙур абруйлы офицер булараҡ танылыу таба. Уға тәүәккәллек һәм һаҡсыллыҡ менән бер рәттән шәхси өлгөһө, кәрәк сағында рух ныҡлығы һәм абруйы менән иң аяныслы һәм хәл иткес мәлдәрҙә яугирҙарын алға әйҙәй алыу хас була. Ошо командирҙың сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары, гв. майоры Сәғит Әлибаев та яугирҙарға рухи терәк булып, дошманды мотлаҡ еңеп буласағына ышаныс тыуҙыра.

Полкта һәм дивизияла өлкән лейтенант Анатолий Михайлович Рудой командалыҡ иткән 4-се эскадрон иң алдынғыларҙан һанала. Фронтҡа яңы ғына килгән йәш, дәртле офицер эскадронға йөкмәтелгән барса хәрби бурыстарҙы теүәл һәм тиҙ арала үтәргә тырыша. Тәүге алыштарҙа уҡ үҙен тәүәккәл һәм оҫта командир итеп таныта. Тап ошо офицер үҙенең батыр яугирҙары менән Днепр йылғаһы аша сығып, дошман позицияларын атакалап, уң яҡ ярҙа тәүге плацдарм булдырыу бурысын үтәргә тейеш була.

Днепрҙы штурмлауға әҙерләнгәндә 58-се атлы полк коммунистарының партия йыйылышы уҙғарыла. Яугирҙар алдында дивизия командирының сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары, гв. полковнигы М.И. Покровский ҡыҫҡа ғына телмәр тота, алда торған хәрби операцияның тотош фронт өсөн нисек мөһим булыуын аңлата. Ошо көндәрҙә генә йөҙҙән ашыу яугир партия ағзаһы булыр өсөн ғариза яҙа. Йыйылышта ҡабул ителгән резолюцияға ошондай ҡарарҙар теркәлә:

1. Нисек итеп булһа ла Днепр аша сығырға.
2. Уң яҡ ярҙа плацдарм алырға һәм бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә.
3. Днепрҙа героизм һәм батырлыҡ өлгөләрен күрһәтергә, башҡорт һәм украин халыҡтары дуҫлығының ҡаҡшамаҫ булыуын ғәмәлдә раҫларға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Башҡорт ҡалаларының оҙайлы тәү тарихы V-VIII быуаттарға барып тоташалыр. Ҡалалары булыу факты башҡорттарҙың башында билдәле хандар торған үҙ дәүләтселеген, властың нәҫел буйынса тапшырылыуын раҫлай.*



# МӘҢГЕЛЕК

## йәки яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы

**Үҙ халҡының тарихы менән ҡыҙыҡһынмаған һәм уны белергә теләмәгән инсандарҙы аңлауы ҡыйын. Тарихҡа ҡарата битарафлыҡ маңҡортлоҡҡа илтә. Ә башҡорт тарихы шундай боронғо, ҡатмарлы һәм серле, уға бер эҫенһәң, һис айырылырлыҡ түгел. Тарих ҡабатланмай, уның барса хәл-ваҡиғаларын беҙ төрлө яҙмаларҙан уҡып ҡына күҙ алдына килтерәбеҙ. Мине бигерәк тә башҡорттар тураһында хәбәрҙар булған, улар тураһында үҙ ҡараш-баһаларын аҡҡа төшөргән шәхестәр ҡыҙыҡһындыра. Тарихнамәләр менән танышҡанда уйланаһың да, хисләнәһең дә, хыялға ла биреләһең. Ҡай сағында күңелеңде күтәрә, бәғзе осраҡта йөрәгеңде лә һыҙлата ул. Ошондай мәлдәрҙә быуаттар томаны эсендә ҡалған шәхестәр, үҙ заманы хаҡында бәйән иткән сәйәхәтселәр, уҡымышлы заттар, тарих ҡаҙанында ҡайнаған башҡа зыялылар менән осрашҡандай булам. Уй-фекер аша, хәҙергесә әйткәндә, виртуаль ысынбарлыҡтың түңәрәк ҡорона саҡырып, улар менән бына тигән әңгәмә ҡороп була бит! Әйҙәгеҙ, шулай итәйек, "Киске Өфө"нөң виртуаль ҡорона саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙҙы тыңлап ҡарайыҡ.**

**Хәҙерге Башҡортостан Көньяҡ Уралды, Урал алды һәм аръяғын, уның көньяғындағы далаларҙы биләй. Тарихи Башҡортостан күпкә ҙурыраҡ булып, уны төйәк иткән ҡәүемдәр меңәр йылдар элек үк донъяның төрлө тарафтарында көн иткән халыҡтарға билдәле булған. Ислам нурынан аҡыл һәм иман алып йәшәүсе боронғо ғәрәп уҡымышлылары башҡорттар тураһында ниҙәр белә ине икән?**

**ИБН ХОРДАДБЕК (IX быуат):** Бөйөк Ғәрәп хәлифәтенең танылған инсаны Сәлләм Тәрджемән ошо быуаттың 40-сы йылдарында Хазар иленә һәм артабан унан көнсығышта булған илдәргә сәйәхәт ҡылды. Ул бәйән иткәндәрҙән Итил йылғаһының тамағынан 27 көнлөк юл үтеүгә, Башҡорт иле башланыуы тураһында хәбәрҙар инек.

**ӘЛ МАСУДИ (X быуат):** Мин баджғардтар тураһында бер аҙ мәғлүмәтте "Китаб әт Тәнбих" тигән әҫәремде яҙған саҡта таптым.Төрки ҡәүемдәр араһында 840 йылдар тирәләрендә низағ сығып, Джурджания күле (һеҙ уны Арал диңгеҙе тип беләһегеҙ) янында орош булды. Ғуздар, ҡарлуҡтар һәм ҡимаҡтарға ҡаршы дүрт төрки ҡәүеме - бәджнәк, бәджнә, баджғард һәм нәүкәрдтәр берләшеп һуғышты. Һуңғылары еңелеүгә дусар булғас, Хазар өлкәһенә сигенергә мәжбүр булды. Һуңынан бәджнәктәр, баджғардтар Византияға ла йыш ҡына һөжүм итеп торҙо.

**ӘБҮ ЗӘИД ӘЛ БӘЛХИ (X быуаттың беренсе яртыһы):** Эске башджарҙарҙан Булғарға тиклем 25 көнлөк юл. Башджарҙар ике ҡәбиләгә бүленә, уларҙың береһе Ғуздар (ҡомандар иле) сигендә, булғарҙарға яҡын йәшәй. Ул 2000 кешенән хасил булып, үҙҙәренең урмандары менән шул тиклем яҡшы ҡурсаланған, хатта уларҙы бер кем дә баҫып ала алмай икән, тип һөйләйҙәр. Улар булғар ҡулы аҫтында йәшәй. Икенсе башджарҙар бәшәнәктәр менән сиктәш. Улар һәм бәшәнәктәр - төркиҙәр.

**ӘБҮ ХӘМИТ ӘЛ ҒАРНАТИ (XII быуат):** Илдәр буйлап сәйәхәт ҡылғанымда Күйәв ҡалаһына барып сыҡтым. Бында төркисә һөйләшкән, улар кеүек уҡ атырға маһир мәғриб кешеләре йәшәй ине. Был илдә уларҙы беджнәк тип атайҙар. Ҡайһы бер юлдаштарымды шунда ҡалдырып, был илдән өҫтәрәк ҡырҡ көн юллыҡ алыҫлыҡтағы башкирдтарға юлландым. Иҫәпһеҙ күп булған мәжүси ҡәүемдәр эргәһенән үтергә тура килде. Улар бейек ағастар һәм баҡсалар араһында йәшәй, бындай ҙур ағастарҙы минең бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ ине, ә уларҙың емештәре лә күренмәне. Унҡурийа иленә барып еттем, бында йәшәүсе халыҡты башкирд тип атайҙар. Төркиҙәр иленән сығып, франк иленә беренселәрҙән булып барып еткән ҡәүемдән улар, иҫәпһеҙ күптәр һәм бик ҡыйыуҙар.

**Ә хәҙер Урта быуаттарҙа киң мәғлүмәтле географ булып танылған мөхтәрәм ғәрәп ғалимы әл Иҙриси әйткәндәргә ҡолаҡ һалайыҡ.**

**ӘЛ ИҘРИСИ ( XII быуат):** Мин үҙ заманымдағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донъя гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс" исемле китап яҙҙым. Басджирттар тураһында ла байтаҡ мәғлүмәт йыя алдым. Китабымда алтынсы климаттың етенсе секцияһында Хазар диңгеҙенең бер өлөшө, эске һәм тышҡы басджирт илдәренең территорияһы һәм уларға төньяҡтан сиктәш булған Аскутийа иле ерҙәре тураһында бәйән ителә. Алла ярҙамы менән беҙгә тиклем яҙылған китаптарҙан ошо илдәрҙең ябай һәм билдәле кешеләре тураһында өйрәнеп белдек.

Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер көсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон ҡуртаҡ. Басджирттар булғарҙар аръяғында гуз иле сиктәренә яҡын йәшәүсе ике ҡәбиләгә бүленә. Уларҙың ғәскәрендә ике мең тирәһе яугир бар. Урман араларына инеп боҫһа, уларҙы сиктәш йәшәгәндерҙең береһе лә таба алмай. Улар тәүәккәл һәм көслөләр. Басджирт халҡы бәджнәктәргә сиктәш. Басджирт ерҙәре Һаҫыҡ ергә (Себер һаҙлыҡтарына) тиклем йәйрәп ята. Тышҡы басджирт ере көнсығышҡа табан шулай уҡ Һаҫыҡ ергә тиклем етә.

**Беҙҙең замандың зыялылары араһында башҡорттарҙың ҡалалары булмаған, улар цивилизацияһыҙ күсмә дала халҡы ғына булған икән, тип фекерләүселәр бар. Ошо хаҡта ни әйтер ине икән хөрмәтле географ әфәнде?**

**ӘЛ ИҘРИСИ:** Тышҡы басджирттар иленә Ҡаруҡийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был илдәр ундырышлы, мул үҫемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм еренә, Шаш иленә һәм ғуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ көсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй.

Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан.

**НИЯЗ МӘЖИТОВ:** Ҡалалар тиҙ генә барлыҡҡа килмәй, шуның өсөн әл Иҙриси һәм уның информаторҙары һүрәтләгән башҡорт ҡалаларының оҙайлы тәү тарихы V-VIII быуаттарға, бәлки, унан да әүәлерәк ваҡыттарға барып тоташалыр. Ҡалалары булыу факты башҡорттарҙың башында билдәле хандар торған үҙ дәүләтселеген, властың нәҫел буйынса тапшырылыуын раҫлай.

**ӘЛ ИҘРИСИ:** Нәмджан ҡалаһы менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә ине. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә.

**НИЯЗ МӘЖИТОВ:** Баш ҡалабыҙ үҙәгендә Өфө-II тип исемләгән боронғо ҡаласыҡ тирәһендә ҙур ҡала булып, уның IV-V быуаттарҙан XVI быуат баштарына тиклем тарихи-географик сығанаҡтарҙа телгә алынған Башҡорт ҡалаһы икәнлегенә шик юҡ. Баш ҡалабыҙҙың боронғолоғо тураһында төрлө быуатта, төрлө илдәрҙә йәшәгән ғалимдар бер үк фекерҙе хуплап торғанда, иң тәүҙә беҙ, Башҡортостан ғалимдары, быны танырға һәм халҡыбыҙға еткерергә тейешбеҙ. Икенсенән, боронғо Өфөнө ентекле өйрәнеү, киләсәк быуындар өсөн уны һаҡлап ҡалыу бурысы ла беҙҙең намыҫта. Ғалим булараҡ, шуны ғына әйтә алам: Өфө-II ҡаласығының боронғо Башҡорт ҡалаһы икәнен иҫбатлар өсөн беҙҙә Ҡаҙандың мең йыллығын иҫбатлауға ҡарағанда ун тапҡырға күберәк, тағы ла төплөрәк, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр һәм материалдар бар.



✓ *Х быуат башҡорттары тураһында Әхмәт ибн Фаҙлан аша хәбәрҙарбыҙ. Ул ошо халыҡтың атамаһы Башғырд булыуын билдәләй һәм, башҡорттарҙы төрки ҡәүемдәр иҫәбенә индереп, уларҙың иң көслөһө һәм уҫалы булыуы тураһында яҙа.*

# хәҡиҡәт,

## ынйы бөртөгөләй йыйыу фарыз

**Ҡоробоҙҙа боронғо башҡорттар тураһында һүҙ барғас, халҡыбыҙ тарихы буйынса үтә ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ҡарашын 1852-1855 йылдарҙа "Башҡорт-мишәр ғәскәрен тарихи һәм статистик яҡтан байҡау" тип аталған документҡа яҙып ҡалдырған билдәһеҙ рус зыялыһын да тыңлап ҡарайыҡ.**

**АНОНИМ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Хәҙер Ырымбур крайында көн иткән төрлө ҡәүемдәр араһында башҡорттар үҙҙәре биләгән ерҙәрҙә борон-борондан йәшәгән берҙән-бер халыҡ булып тора. Уларҙың Волга аръяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт Христос тыуғандан һуң Х быуат башында уҡ билдәле булһа, бында осраған башҡа ҡәүемдәрҙең барыһы ла тарихи ҡомартҡыларҙа XVI быуат урталарынан, Грозныйҙың Ҡаҙанға һөжүм итеп походтарынан да иртәрәк иҫкә алынмай.

Х быуат башҡорттары тураһында Хиванан (Джорджак) Волга булғарҙары батшаһына барышлай уларҙың ерҙәре аша үтеп сыҡҡан Моҡтадир хәлиф илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан аша хәбәрҙарбыҙ. Ул ошо халыҡтың атамаһы Башғырд булыуын билдәләй һәм, башҡорттарҙы төрки ҡәүемдәр иҫәбенә индереп, уларҙың иң көслөһө һәм уҫалы булыуы тураһында яҙа. Артабан ул, башҡорттарҙың мәжүси диндәре тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп, уларҙың ҡайһы берҙәренең мосолман булыуын да иҫкә ала...

**Олуғ хәлиф Әл Моҡтадир тарафынан Булғар ханы Алмышҡа 921 йылда ебәрелгән илселек кәтибе Әхмәт ибн Фаҙланды, ошо дәүерҙән бирле меең йылдан артыҡ ваҡыт үтеүенә ҡарамаҫтан, белмәгән башҡорт һирәктер. Һеҙҙең юлъяҙмағыҙҙы күп ғалимдар уҡып тикшерҙе, ә үҙен Көҙән башҡорто тип атаған арҙаҡлы затыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди ошо хеҙмәт буйынса Берлинда докторлыҡ диссертацияһы яҡланы. Әхмәт ибн Фаҙлан үҙ күҙҙәре менән күргән һәм башҡаларҙан һорашып белгән башҡорттарҙан ни эшләп хәүефләнде икән һуң?**

**ӘХМӘТ ИБН ФАҘЛАН (922 йыл):** Беҙгә "Башғырдтарҙан ҡурҡығыҙ!" тинеләр. Уғыҙ урҙаһынан китеп, Яғынды йылғаһына еткәс, каруанды аръяҡҡа турһыҡтар өҫтөндә сығарып алдынан, башғырдтарҙың һөжүменә эләкмәҫ өсөн, һағауылдарҙың бер өлөшөн йылға аша алдан сығарып, һаҡлыҡ саралары күрҙек. Джайих йылғаһы аша сыҡҡас, башғырд тигән ошо төрөк ҡәүеменең иләндә булдыҡ. Беҙ уларҙан хәтәр ҡурҡтыҡ, сөнки улар төркиҙәрҙең иң яманы һәм ҡыйыуы, шулай уҡ кеше үлтереүҙә ааыуһыҙ; шулай, әгәр бер кеше дошманын осратһа, уның башын өҙә, башты үҙе менән ала һәм ҡәүҙәһен үлтергән урында ҡалдыра.

**Замандаштарыбыҙға Әхмәт ибн Фаҙландың башҡорттарҙың ҡайһы бер инаныстары тураһында яҙып ҡалдырыуы бик ҡәҙерле. Шул уҡ сыңрау торна тураһындағы риүәйәт бынан мең йыл элек уҡ башҡорттарҙа боронғолар һүҙе булып, торна бөгөн дә изге ҡоштар иҫәбендә йөрөй...**

**ӘХМӘТ ИБН ФАҘЛАН:** Беҙ башҡорттарҙан торналарға табыныусы бер таифә күрҙек. Улар миңә шулай аңлатты: үҙҙәренә дошман булған бер ҡәүем менән һуғыш алып барғанда дошмандары уларҙы еңелеүгә дусар итә. Шул саҡта дошмандарының артында торналар ҡысҡыра башлаған, ә улары ҡурҡыуға төшөп, инде еңдем тигәндә, үҙҙәре еңелә. Ошо арҡала улар торналарҙы ололайҙар һәм шулай тиҙәр: "Былары беҙҙең раббыларыбыҙ ебәрҙе, сөнки улар дошмандарыбыҙҙы ҡыйратты".

**БИЛДӘҺЕҘ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Вәлиди әфәнде әйткәнсә, ибн Фаҙландан һуң башҡорттар һәм Башҡортостан XIII быуатта Көнбайыш Европанан Урта Азияға бөйөк монгол хандарына Папа илселәре сифатында килеп йөрөгән католик миссионерҙар яҙмаларында телгә алына. Уларҙың береһе, Плано Карпини, Половецтар (Ҡыпсаҡ) ере тураһында бәйән итеп, уның төньяҡтан "башҡорттар иле, венгрҙарҙың ватаны менән" сиктәш булыуы тураһында әйтә. Икенсеһе, Руисбрек (Рубрук), Башҡортостандың Волга менән Урал араһында, Волга булғарҙары еренә күрше булыуын иҫкә ала. Шулай уҡ ул Паскатир кешеләре "венгр телендә һөйләшә", тип билдәләй.

**Ысынлап та, тарих фәнендә Дунай тамағында йәшәгән Мадъярстан башҡорттары тураһында мәғлүмәт байтаҡ. Ҡасандыр мадъяр һәм башҡорттарҙың аралашҡанда бер-береһен еңел аңлай алыуы хаҡында ла яҙыусылар бар...**

**БИЛДӘҺЕҘ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Башҡорттарҙың венгрҙар менән оҡшашлығы тураһында иҫкә алынған миссионерҙар тарафынан әйтелгәндәр хәҙер ошо хаҡтағы күп тикшеренеүҙәрҙән һуң аҙ ғына булһа ла шик тыуҙырмай. Былары ла, тегеләре лә бер үк боронғо Урал ҡәбиләһенән килеп сыҡҡан. Хәҙерге заман этнографтары аңлатыуынса, был ҡәбилә тәүтормош дәүере ҡәбиләһе булып, бик боронғо замандарҙа уның нигеҙендә фин, монгол һәм төрки ҡәбиләләре, ә унан да һуңыраҡ бөтә хәҙерге фин-татар халыҡтары тип аталып йөрөлгәндәре барлыҡҡа килгән. Ул Урал ҡәбиләһе тип аталған, сөнки Урал тауҙары уның тәү тәйәге итеп һаналған... Ҡәбиләнең үҙ Ватаны булған тауҙарҙа, Көньяҡ Урал ыңтта-рында тороп ҡалған өлөшө иң кәмендә Х быуаттан алып хәҙерге ваҡытҡа тиклем башҡорттар тип аталып йөрөүсе халыҡты барлыҡҡа килтергән...

**ӘБҮ ХӘМИТ ӘЛ АНДАЛУЗИ (XII быуат):** Мин Мадъярстан башҡорттарын яҡындан белә инем, улар араһында байтаҡ йылдар йәшәнем. Ике улым башҡорт ҡыҙҙарына өйләнде, уларҙан ейәндәрем дә булды. 1135 йылда Итил болғарҙарына сәйәхәт иткән саҡта башҡорттарға ла барҙым. Улар мәрхүмдәрҙе оҙон итеп ҡаҙылған ҡәберҙәргә күмә, 1160 йылда Анатолиялағы Конья ҡалаһы янында Дауыт ибн Ғәли исемле башҡортто күреп һөйләшкән саҡта ул да ошоно дөрөҫләне. 1158 йылда беҙ Гур Керман тип йөрөткән Киевка, унан Итилдәге Саҡсын ҡалаһына, Хорезм юлы менән Бағдадҡа һәм Һижазға киллдем, хаж ҡылдым. Дунай мадъярҙары башҡорттар менән бер үк ҡәүемдән, уларҙың королен беҙ "башҡорт падишаһы", тип атайбыҙ.

**ИБН СӘЙЕТ ӘЛ МӘҒРИБИ (XIII быуат):** Дунайҙың көнсығышында йәшәгән мадъярҙарҙы һуңғар, тип тә атайҙар. Улар ошо уҡ йылғаның көньяғында ерләшкән мосолман башҡорттар менән ҡәрҙәш ҡәүем. Һуңғарҙар пайтәхете Торобтыуа тип аталһа, мосолман башҡорттарҙың баш ҡалаһы Ҡорат исемле. Уларҙы бер төркмән фәҡиһы (дин ғалимы) мосолманлыҡҡа йөгөндөргән.

**ЯҠУТ ӘЛ ХАМАУИ (XIII быуат):** Миңә Халебҡа уҡырға килгән Мадъярстан башҡорттарының береүһе менән һөйләшергә тура килде. Уның әйтеүенсә, ундағы мосолман башҡорттар барыһы ла хәнәфи мәҙһәбенә ҡарай, имеш. Уларҙы мосолманлыҡҡа бик борон заманда Болғар мәмләкәтенән килгән ете кеше өйрәткән. Ул был риүәйәтте атай-олатайҙарынан ишеткән. Дунай башҡорттары 30-ға тиклем ҡәрйә тәшкил итеп йәшәй. Уларҙың һәр береһе ҡала хәтле ҙур, тик Мадъяр падишаһтары, башҡорттарҙың күтәрелешенән ҡурҡып, ҡәлғә төҙөргә рөхсәт итмәй икән. Телдәре лә инде төркисә түгел, мадъярса булып бөткән, ҡиәфәттәре лә европаса, имеш. Ғәскәр сифатында мадъяр короле хеҙмәтендә мосолман булмаған ҡәүемдәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашалар; һаҡалдарын ҡыралар, бәғзеләре Ислам ғилемдәрен өйрәнеп фәҡих булыу өсөн Халебҡа килә икән.

**XX быуатта башҡорт халҡының тарихи этнографияһына нигеҙ һалған арҙаҡлы рус ғалимы Сергей Руденконың бик нигеҙле фекерҙәрен дә иғтибарға алыу фарыҙдыр.**

**СЕРГЕЙ РУДЕНКО:** Этник яҡтан боронғо башҡорттарҙы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш территорияһы буйынса Геродоттың тиссагеттары, ә уның көньяҡ һәм көнсығыш яғында савроматтар һәм ииркар менән бәйләү мөмкин, тип иҫәпләйем. Шулай ҙа беҙҙең эраның I мең йыллығының беренсе быуаттарынан ғына башҡорттарҙы көнкүреше дала яғында күсмә малсылыҡ менән ҡуша алып барылған һунарсылыҡ, таулы һәм урманлы тарафта - өҫтөн торған һунар итеү һәм ҡортсолоҡ шөғөлдәре, билдәле кимәлдә ер эшкәртеү менән ҡуша барған ултыраҡ малсылыҡ менән бәйле берҙәм ҡәбиләләр төркөмө, тип ҡарап була.

Башҡорттарҙың ҡатмарлы тарихи үткәне, бигерәк тә халыҡтарҙың бөйөк күсеше тип аталған дәүерҙән башлап, ниндәйҙер кимәлдә уларҙың физик тибында, шулай уҡ телендә һәм көнкүрешендә сағылыш тапмай ҡалмаған. Әммә төньяҡ фин-уғыр ҡәбиләләре менән бәйләнешкә инеү ҙә, Башҡортостан территорияһына һундарҙың, һуңынан татар-монгол, ҡаҙаҡ ҡәбиләләренең үтеп инеүе лә, ҡалмыҡтар менән үҙ-ара бәйләнеш тә, һәм, ахырҙа, һуңғы осорҙа көнбайыштан Ҡаҙан татарҙарының, мишәр кеүек халыҡтарҙың үтеп инеүе лә башҡорттарҙың физик тибын да, телен дә, көнкүрешен дә тамырҙан үҙгәртә алмаған.

(Дауамы 10-сы биттә).



✔ *Үҙ-үҙемә ҡул һалыр сиккә еткәндә лә изге һәм саф тәбиғәтле башҡорттар тураһында хәтерләп, әлләә шул гүзәл халыҡ араһына китеп йәшәргәмә икән, тип, үҙемдең "Тәүбә ҡылыу" тигән философик әҫәремдә лә яҙғайным.*



(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Ул боронғо башҡорттарҙың теле тураһында бик матур фекерҙәр әйтә.**

**СЕРГЕЙ РУДЕНКО:** Моғайын, ошо заманда уҡ Башҡортостан халҡының күпселеге аралашҡан тел әлегә беҙгә билдәле булмаған урындағы телдәрҙә ассимиляцияланған боронғо башҡорт теле булғандыр. Уларҙың үҙенсәлектәрен башҡорт телен күрше халыҡтарҙың телдәре менән тәрәндән сағыштырып, лингвистик тикшереү юлы аша ғына асыҡлап буласаҡ. Башҡорт халҡы составына ингән ҡәбиләләргә хас диалекттар, урындағы һөйләштәр булыуына ҡарамаҫтан, халыҡтың берҙәм һәм уртаҡ теле был диалекттарҙан өҫтөнлөк алып, уларҙы үҙенә бойһондорорға тейеш була. Бынан башҡа башҡорттар халыҡ булып йәшәй алмаҫ ине.

**НИЯЗ МӘЖИТОВ:** Беҙ Көньяҡ Уралда иң боронғо дәүерҙәрҙән XVI быуатҡа тиклем бер-береһен алмаштыра килеп йәшәүсе халыҡтар тураһында мөмкин булғанса тулыраҡ ҡараш булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуйғайныҡ. Һуңғы 2-2,5 мең йылдарҙағы халыҡтар тарихын яҙғанда, беҙҙең инаныуыбыҙса, хәҙерге башҡорт халҡының алыҫ һәм яҡын ата-бабалары булған боронғо һәм урта быуат ҡәбиләләре иғтибарыбыҙ үҙәгендә булды. Башҡорт халҡының формалашыуы оҙайлы ваҡыт арауығында барып, VI-X быуаттарҙың һәм унан алдағы йөҙ йыллыҡтарҙың да ошо процесһың айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил итеүе хаҡындағы һығымтабыҙ үҙебеҙ өсөн дә көтөлмәгәнерәк булды.

**Ватансыллыҡ - башҡорттарҙың милли йөҙөн билдәләүсе төп сифат, тип әйтергә була. Уларҙың үҙ Ватанын, үҙ ерен дошмандан һаҡлағанда күрһәткән батырлығы, яугирлығы хаҡында бар донъя белә. Шулай булмаһа, үҙенең аҫыл аҫаба ерендә - Иҙел-Урал-Көнсығыш Себер арауығында - улар хәҙерге көнгә тиклем төп ерле халыҡ булып һаналмаҫ ине. Быны 200 йыл элек Рәсәйгә баҫып ингән Наполеон ғәскәренә ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарына бирелгән баһа ла раҫлай.**

**ПЕТР КУДРЯШЕВ (декабрист, рус шағиры):** Мин ул саҡта башҡорт яугирҙары менән һоҡланыуымды бына нисек белдергәйнем:

"Друзья! Гордитесь: целый мир
узнает, сколь могуч башкир!"

**ИОГАН ВОЛЬФГАНГ ГЕТЕ (бөйөк немец шағиры):** Ошо ваҡытта үҙем йәшәгән Веймар ҡалаһында минә лә башҡорт яугирҙарын күреү насип булды: был ғәскәр минә бик ҡыҙыҡ тойолдо. Улар осло башлы ҡыҙыл кәпәс кейгән. Ҡоралдары: һөңгө, уҡ-һаҙаҡ. Аттары тәбәнәк кенә. Беҙҙә, улар ҡурҡыныс, ҡырағай әҙәмдәр, кеше ашай, тип ҡурҡыҡкайнылар. Былар ни, бик итәғәтле булып сыҡты. Ҡалаға инеү менән оцепление ҡуйҙылар, бер кемгә лә теймәнәләр, фатирға рөхсәт һорап ҡына урынлаштылар. Уларҙың принцын (башлығын) һәм бер төркөм офицерҙарҙы ҡунаҡҡа саҡырҙым. Улар шул хәтлем эскерһеҙ, ихлас кешеләр булып сыҡты. Минең ижадыма юғары баһа бирҙеләр. Баҡсаға сығып, улар миңә йәйәнән уҡ атып күрһәтте. Мин дә атып ҡараным, ләкин мин атҡан уҡ дүрт метрҙан да ары осмай, кире төштө. Уларҙың ағасҡа ҡаҙалған уғын кире тартып алырлыҡ түгел ине.

**Бик күп рус зыялыларының башҡорттарға борон-борондан хас булған башҡа гүзәл сифаттар хаҡында әйткәндәре бөгөн дә үҙ әһәмиәтен юғалтмағандыр ул…**

**ЛЕВ ТОЛСТОЙ (бөйөк рус яҙыусыһы):** Үҙ-үҙемә ҡул һалыр сиккә еткәндә лә изге һәм саф тәбиғәтле башҡорттар тураһында хәтерләп, әллә шул гүзәл халыҡ араһына китеп йәшәргәмә икән, тип, үҙемдең "Тәүбә ҡылыу" тигән философик әҫәремдә лә яҙғайным. Кәрәлеккә икенсе килгәнемдә (1871 йылда) башҡорттарым бөтөнөһө лә мине таныны һәм ҡыуанып ҡаршы алды: әммә уларҙың тормошо элекке менән сағыштырырлыҡ түгел, хөртәйгән. Иң яҡшы ерҙәрен киҫеп алғандар. Яңы тәсьораттар күп булды: Геродотлыҡ аңҡып торған башҡорттар ҙа, халыҡтың ябайлығы һәм киң күңеллелеге арҡаһында ғәжәп матур күренгән ауылдар ҙа... Башҡорттар ғәжәп һәйбәттәр. Улар ябай, тоғро, саф күңелле, аҡыллы.

**ВЛАДИМИР ЛЬВОВ (яҙыусы):** Башҡорттар араһында оҙағыраҡ йәшәгән һайын мин был халыҡтың һоҡланғыс күңел матурлығы сифатын баһаларға өйрәндем. Киң күңелле, кешегә яғымлы, баҫалҡы, әммә бер кем алдында ла дәрәжәһен төшөрмәгән был ғорур халыҡты яҡын иттем. Хатта иң ярлы башҡорт та үҙен кәмһетеп тотмай һәм кемгәләр ярарға ла тырышмай. Кем генә булма, башҡортҡа һин уға тиң кеше, ҡунаҡ, һәм ул күрешергә ихлас ҡул бирә.

**Улар башҡорт халҡының киләсәге өмөтлә булыуын ниндәй сәбәптәр менән аңлатҡан икән?**

**ВАСИЛИЙ ФЛОРИНСКИЙ (табип, яҙыусы):** Башҡорттар менән осрашҡан ваҡытта уларҙың айыҡ аҡылы ғына түгел, ә уйлап табыу һәләтенә маһир икәне асыҡ күренә. Ғөмүмән, уларҙың аҡылы зирәк һәм отҡор булыуы менән айырылып тора, был сифаттар башҡорттарҙың холҡонда ла ярылып ята; бер механик ғәҙәт кенә түгел, ә төрлө алымдар талап иткән һәм шәхси хыялдарға урын булған шөғөлдәргә тартылыуҙары ла шуның менән аңлатылалыр. Минеңсә, башҡорттарҙан бик яҡшы малсылар, һөнәрселәр, фабриканттар, сауҙагәрҙәр килеп сығырына ышаныр була. Башҡорттарҙың киләсәк быуындарына цивилизация ниндәй йоғонто яһаясағын әйтеүе ҡыйын ине, әммә улар үҙҙәренең ҡәрҙәштәре булған венгрҙарҙан ҡалышмаҫтар кеүек тойолдо.

**МИХАИЛ ЛОССИЕВСКИЙ (ғалим-этнограф, яҙыусы):** Иҡтисади яҡтан башҡорттарҙың ауыр хәлдә ҡалыуына нигеҙләнеп, ҡайһы бер тикшеренеүселәр XIX быуат аҙағында ошо халыҡ юҡҡа сығыр, бөтәр, тип яҙып сыҡты. Әммә бөтөнләйгә икенсе, ҡапма-ҡаршы ҡараш та булды: башҡорттар бөтмәй, арта бара. Башҡорттарҙы бик күп йылдар дауамында өйрәнгән доктор Д.П. Никольский бына ниндәй һығымтаға килде: бик ыңғай булмаған тормош шарттарына ҡарамаҫтан, уларҙы физик үҫеше буйынса бөтөп барыусы халыҡтар рәтенә ҡуйып булмай. Уларҙың үҫеш мөмкинлектәре күп, ә аҡыл үҫеше кимәле буйынса улар башҡа күп рус булмаған Рәсәй халыҡтарынан алдымыраҡ. Доктор Никольскийҙың ҡарашы ысынбарлыҡҡа тура килә, тип фекер йөрөтөргә ныҡлы нигеҙ бар.

# МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ,

## йәки яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы ынйы бөртөгөләй йыйыу фарыз

Башҡорт теле, башлыса үҙенең элекке замандарҙан урынлашҡан грамматик төҙөлөшөн һаҡлап ҡалып, һүҙлек фонды яғынан байый барған.

**МӘХМҮТ ӘЛ ҠАШҒАРИ (XI быуат):** Аллаһы Тәғәләнең тәҡдире һәм мәрхәмәте менән миңә "Диуану лөғәт әт-төрк" тип аталған төрки ҡәүемдәре телдәренең һүҙлеген төҙөү насип булды. Төрки телле халыҡтарҙы бик ихлас һәм ентекләп өйрәндем. Башҡорттар тураһында ла хәбәрҙар булдым. Улар - төп һәм беренсел булған 20 төрки ҡәүеменең береһе. Башҡорт теле ҡырғыҙ, ҡыфджаҡ, уғыҙ, тухси, яғма һәм башҡа төрки ҡәүемдәренең теленә яҡын. Башҡорт һөйләше төркисәнең йемек (кимәк-ҡыпсаҡ) һөйләше лә ингән тел төркөмөнә ҡарай.

**Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосында һүрәтләнгән боронғо тәү тарихы рәсми фән тарафынан да раҫлана бара түгелме һуң?**

**ВЛАДИМИР ОВСЯННИКОВ:** Башҡорт халҡының бишеге булған Көньяҡ Урал ландшафтының тарихи әһәмиәте уның сиктәрендә мәҙәни традицияның өҙөлмәүенән күренә. Дәүерҙәр, матди мәҙәниәт алмашыныуына, климат һәм сәйәси үҙгәрештәргә ҡарамаҫтан, бында һәр саҡта ла киләсәк быуындар өсөн аралашсы һәм коммуникатор булып торған этник ядро һаҡланып ҡалған. Үҙ мәҙәниәтендә бөтә уҙған дәүерҙәрҙең эҙҙәрен һаҡлаусы хәҙерге башҡорт халҡының формалашыуы ошо традицияның үҫеш һөҙөмтәһе булып тора.

**МАРБО (Наполеон генералы):** Улар беҙҙең ғәскәрҙә һәр саҡ һағалап ҡына торҙо. Саҡ ҡына уңайы сығыу менән, һағыҙаҡ кеүек һымаҡ ябырылалар. Ә уларҙы ҡыуып етеүе бик ҡыйын ине. Уҡтарынан уғата мәргән атҡанлыҡтан, уларҙы ватандаштарым "Төньяҡ амурҙары" тип атаны.

**МИХАИЛ КУТУЗОВ:** Бородино алышынан һуң мин башҡорт атлылары башлыҡтарынан Ҡаһым түрә исемен йөрөткән батыр затҡа: "Ах, любезные мои башкирцы, какие вы молодцы!" - тип әйткәйнем. Һуңынан йырмоң һөйөүсе башҡорттар ошо хаҡта "Любезники, любизар, маладис, маладис!" тип йыр ҙа сығарған икән. 1812 йылда Ырымбур губернаторы кенәз Волконскийға яҙған хатымда: "Һеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ, Ваше сиятельство, нисек итеп һәр рус һалдаты ҡасыусы дошманды тукмап, кинәнес алғанын, батырлыҡ ҡылғанын. Шулай уҡ казактар һәм башҡорт полктарының уларҙы ҡырғанын!" тип тә яҙғайным.



Виртуаль тарихи ҡорҙо
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ
ҡорҙо.

✓ Мин хәҙрәткә йоҡом болара башлаһа, әсәйем әҙерләгән саҙаҡаны алып, ылғый өшкөртөләүгә йөрөйөм. Саҙаҡаны аҙыҡлата илтәм: таҡта сәй, бойҙай, көрөшкә менән һөт, йә яңы бешкән бер йомарлам май, ярты тиҫтә тауыҡ йомортҡаһы.





# ҠАРАУЫЛСЫ

(Хикәйә)

Хәйҙәр ТАПАКОВ

– Әүәлгеләй унының-быныһын етештереп, бесептегеп, йүгермәләп йөрөр саҡтарың алда әле. Ҡулың алтын бит һинең, әхирәт, күлдәктәрҙе тәнгә һылаштырып ҡойоп, кәртинкәләй матур итеп ҡайып, һыбайлы атынан төшөп, йәйәүле ятып ҡарарлыҡ килештереп тегәһең!

- Бигерәк телгә бөткәнһең инде, Ҡыҙбикә, телеңдән шәрбәт, бал тама. - Әлмәғиҙә һүрәнке йылмайҙы. - Ҡуй, артыҡлап маҡтама, йә ышандырып ҡуйырһың!

- Маҡтамайым, нисек бар, шулай әйтәм, ауылдың ҡыҙ-ҡырҡыны, бисә-сәсәһе һинең ҡулыңа ғына ҡарап тора бит. Тиҙҙән Үктәбер байрамы, сәләмәтләнереңде көтөп кенә йөрөйҙәрҙәр әле.

- Көтәләр микән? - Ауырыуҙың күҙҙәре дәртле янып китте. - Әүәле ни шәм яҡтыһында кистән иртәнгәсә бер күлдәкте тып иттереп әҙерләй инем. Арымағанымды әйт... Үктәбер, тиһең, уға саҡлы ла әллә күпме ваҡыт бар әле, ураҡ тамамланмаған, мал ҡураға инмәгән.

- Түҙгәнгә - түш ите, шул көндәрҙең килеренә өмөт итәйек, иншалла! - Өләсәйем йоҡа ирендәрен йыбырлатып, ауыҙы эсенән аят уҡырға тотоноп китте. Әлмәғиҙә ауырлыҡ менән тороп ултырып, ә мин сүкөйгән килеш ҡулдарыбыҙҙы алға һоноп, тынып ҡалдыҡ. Ниһайәт, өләсәйем биттәрен һыпырып әпәр итте. - Быны ошо сәләмәтләнеү доғаһы үтә лә килешә ул, сир-зәхмәтте ситкә ҡыуа, тәнгә сихәт өҫтәй. Һин дә, әхирәт, уны ҡайта-ҡайта ҡабатлап ят.

- Бөгөн таңда үҙемә ясин сыҡтым әле... - Тиҙ арала күҙ нурҙары һиҙелеп тоноҡланған Әлмәғиҙә талсыҡҡандай кире түшәгенә бөршәйеп ятып, йөҙөн стена яғына борҙо.

Тышҡа сыҡтыҡ. Артыбыҙҙан Ҡупшыҡай күренде лә, тотҡарланыр инегеҙ аҙыраҡ, тигәндәй, аяҡтарыма килеп һырпаланды. Ошоғаса ирәбе ҡараған өләсәйемдең йөҙө төмһәрҙе, саҡ ишетелерлек итеп шыбырланы:

- Им-том килешмәҫ, үткәндә килтергән өшкөртөлгән тоҙҙан рәт сыҡмаҫ, моғайын... Тормаҫтан ятып тамаҡ һайлай башлаған, әләйгәс, эштәре шәптән түгел. Өҫтәүенә үҙемә-үҙем ясин сыҡтым, ти бит әле. - Бесәйгә өндәште. - Донъя хәлдәре төрләнеп, ул-был була ҡалһа, кемдең генә ҡулына ҡарап ҡалаһың инде, бисара? Сит-яттар һине хужабикәң һымаҡ әпәүләп ҡарамаҫ, ҡәҙерләмәҫ шул... - Әлмәғиҙә ҡарсыҡтың аяҡҡа баҫып китеренә нык икеләнә, шикләнә, тимәк.

Йортобоҙ янына еткәс, өләсәйем ишек алдына үтте, ә мин урам яҡтағы баҡса ултырғысына барып һаҡтым. Селлә етһә, өй эсендә яғылған мунсалай тынсыу була, ғәҙәттә, ә бында, муйыл ҡыуағының күләгәһендә еләҫ, рәхәт. Күршеләр йәшәгән Батырйән дуҫым ҡайтып күренеремде тәҙрәләренән күҙәтеп торғандыр, тиҙ арала яныма килә һалып етеп, усы менән ауыҙын ғына таҡыр маңлайымды сәпелдәтте, мин еңелсә, ауырттырмай ғына уның ҡорһағын төйөрҙөм. Беҙҙең сәләмләшеүебеҙ шулайыраҡ.

- Ниндәй хыялый уйға баттың, мулла бесәйе? - Ул миңә ҡушаматым менән өндәште. - Һимеҙ эсендә ҡояшта ҡыҙҙырып ултырғасың, моғайын да, яңы айырылған ҡаймаҡты ялағанһыңдыр?

Йәнемә тейгән ҡушамат шунан килә, беҙҙән өй аша ғына мулла олатай ҡарсығы менән йәшәй. Торлаҡтары сыйырсыҡ ояһылай ыҡсым, яҫы таш тупһалы, бура соланлы, балсыҡ һылап аҡбалсыҡ менән аҡланған дүрт мөйөшлө йорт. Өй ҡыйыҡы ла транса менән ябылған. Әйткәндәй, ундай таҡта ҡыйыҡлылар силсәүит рәйесендә, колхоз хужаһында, йәнә мәктәп директорында, ҡалғандары арыш һаламынан, йә йүкә ҡабығынан бөтөрөлгән, балсыҡтан ҡойоп, баштарында билсән, әрем ярпылдап, ауылды йәмһеҙләгәндәр ҙә юҡ түгел. Мулла өйөнөң эсендә, һуҡҡайҙа, ян-тирәһе, ишеге быялалап ҡулдан эшләнгән һауыт-һаба шкафы, ҡаршы яҡта урындыҡ. Һуғылған балаҫ түшәлгән урындыҡтың уң яғында маҡбаллы һандыҡ, уның өҫтөнә тәңкләп түшәнер-яҫтаныр өйөлгән. Шкаф янындағы стенаға өс буй итеп асыҡ зәңгәр төҫкә буялған таҡталар беркетелгән, унда дин китаптарынан тыш, әҙәби, тарихи китаптар теҙелгән. Шунда уҡ төҫлө карталар йыйылмаһы ла бар. Уны ҡулыма алып ҡыҙыҡһынып, Ер шары илдәре буйлап сәйәхәт ҡылғандай, асҡылап ултырғаным да бар. Тирә-яҡта киң билдәле дин әһеленең бар мөлкәте ошо тәфсирләп иҫәпләгәндәрҙән ғибәрәт. Мин хәҙрәткә йоҡом болара башлаһа, әсәйем әҙерләгән саҙаҡаны алып, ылғый өшкөртөләүгә йөрөйөм. Саҙаҡаны аҙыҡлата илтәм: баш бармаҡтан ҙурыраҡ таҡта сәй, тоҫтаҡ самаһы бойҙай, көрөшкә менән иртәнге һауылған һөт, йә яңы бешкән бер йомарлам май, унан ҡалһа, ярты тиҫтә тауыҡ йомортҡаһы. Мулла олатайҙы бик йыш ҡунаҡҡа, йә аят ашына саҡыралар. Шул хаҡта ишетеп ҡалыу менән баҡса ултырғысына сығып ултырам да теләгенең әбейен эйәртеп кире бороулоун көтә башлайым. Сысҡан аулаған бесәйҙәй һиҙгер аңдыйым. Бына улар оҙаҡ көттөргәндән һуң күҙ күреме ерҙә пәйҙә булалар. Нык, ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйлағандарҙыр, күрәһең, көтөүҙән аушанлата баҫып, туйып ҡайтып килгән һыйыр ише үтә лә яй, ығыш, теләр-теләмәҫ ҡымғырлайҙар былар. Ни хәл ҡылмаҡ, сабыр иткән, мораҙына еткән, тиҙәр бит, сыҙамлыҡ күрһәтергә кәрәк, уларҙы көткәнлегемде һиҙҙермәҫкә тырышам, йәнәһе лә, былай ғына, һауа һулар өсөн генә сығып һаҡҡанмын ултырғысҡа. Олатай миңә иғтибар ҙа итмәгәндәй, күрмәгәндәй, имән таяғына таянып, йөҙөн күккә сөйөп, тәҙ атлап, тура ҡапҡа үтеп китә, ә тәбәнәк буйлы, йыбырлаҡ аҙымлы Зөләйха абыстай туҡтала, сөнки миңә биреләһе күстәнәс унда. Ул яныма сүгә, бөрләнтин күлдәгенең изеүенә ҡулын тығып ебәреп, ҡырҡынды тауарҙан ҡоршап тегелгән булыр-булмаҫ һөлгөләй ҙур түшелдереген килтереп сығара ла инселәнгән күстәнәсте алдыма бушатырға тотона. Нимә генә алмаған ул: тумалаҡ манпасый, нәҙек билле баллы перәник, өрөк, май-шәкәргә әүәләп йомарланған ҡыҙыл эремсек, хәлүә, кетерҙәк печенье, бер һүҙ менән әйткәндә, күҙ менән ҡаш араһында күктән йомарт Раббы төшөргән затлы хан һыйына күмеләм, әйҙә, һайлап, тәмләп ҡабып рәхәтләнеп һыйлан. Ҡыҫмыр, һаран түгелмен, саманан арттырмай ғына Батырйәнгә лә өлөш эләгә, әммә оҡшамағандары, тәме-таты күңелемә ятмағандары. Һыйымдың муллығын, табынымдың байманлығын күргән дуҫымдың талағы таша, шуға көнләшеүенә сыҙаша алмай, бик йыш ҡына, кәйефе килмәгәндә, мулла бесәйе, монтағай малы, тип үсекләргә әүәҫ. Шыпа ла үпкәләмәйем, бик йыш асыуыма, зитыма тейһә лә, һәйбәт кеше ул Батырйән: эскерһеҙ, ярҙамсыл, иң мөһиме, дуҫлыҡҡа тоғро.

- Өләсәй менән мәшәҡәт артынан йөрөп әйләндек тә һауа һулап киңәнәм, ыңғайы бер уйҙарға ла бирелеп кителә. - Дуҫыма һынамсыл ҡарап алдым. - Күрәм, кәйефең киткән, балтаң һыуға төшкән?

- Баҙар көндө атай-әсәй Йылайыр баҙарына барырға йыйыналар. Үҙҙәре менән мине алғылары килмәй нишләптер, шуға ҡыуанайыммы тағы? - Батырйән илтифатһыҙ ҡул һелтәне. - Бер баш һәйбәт, икәү тағы ла яҡшыраҡ, тигәндәй, бәлки, миңә лә ишеттерерһең уйыңды? - Әйтеренә гелән фекер, мәғәнә һалырға яратҡан, ҡыҙыҡһыныусан холоҡло Батырйән ҡыҫҡа итеп һөйләй белмәй, был юлы ла һыу буйы итеп теҙҙе.

- Оҙаҡҡа һуҙмай ғына ҡарбуз тәмләп ҡарағы килә.

- Быны һиңә, мә, мулла олатай, абыстай инәй ташығандарына мөрхәтһенмәйһеңме? Мал-тыуар бер ашай ҙа көйөшкә туҡтала, ә быны талымһыҙ әҙәм балаһын күпме генә тығындырһаң да туя белмәй. Уй тигәнең, ҡомағай теләк тә баһа. Мулла малайы ел шулай тамаҡ ҡайғырта инде ул, уға һурпалы аш, майлы ҡоймаҡ менән ҡаймаҡлы сәй кәрәк. Ярай оҙаҡҡа һуҙмай ғына, тиһәң дә атайымдан таптырырмын, ул баҙарға эйәртмәүҙең ташламаһы итеп, моғайын, үтенесемде кире ҡаҡмаҫ.

- Оҙон-оҙаҡ көтә алмайым шу, миңә тиҙ арала ауыҙ итергә ине.

- Оҙаҡҡа һуҙмай, тиһең инде?

- Иртәгә иртәнсәктән дә ҡалмай.

- Нәпсеңде кеҫәңә йәшереп тор, йәме, аҙна аҙағы тигәс, аҙна аҙағы! Ярай, пока, миңә танабыҙҙың быҙауын эҙләп апҡайтырға кәрәк! - Ус яңынан түбәмә сәпелдәне. - Мин киттем!

Әжәл дарыуылай таптырмаҫ булды ла баһа был ҡарбуз, тигәнең. Күңелһеҙләнеп тә өлгөрмәнем, Батырйән ҡабаттан яныма килеп ҡунды:

- Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман, ти минең ҡартәсәй. Асығып ултыраһыңмы, әллә ҡаныгыпмы?

- Сарсап.

- Ыслушай, һинең кипкән асмәйел тамағыңды тиҙ арала, оҙаҡҡа һуҙмай ғына сылатып була ул, бик тырышһаң!

- Нисегерәк итеп? - Ҡыҙыҡһына төштөм.

- Уның өсөн башты эшләтергә кәрәк, дәҙәндеке һымаҡ аҡыллы башты! - Батырйән ҡайсы менән ентекләп мөнтәлгән йомро башын ыуҙы. - Әгәр юлдарын өйрәтһәм, шул эштә туранан-тура ҡатнашһам, әжеренә ни бирерһең?

- Унының икенсе берәүҙән һора.

- Мулла нәҫеле шулай ҡыҫмыр була шул, гел үҙ яғына тарта, ҡайыра, ә бирә белмәй, был - биргәнләмәй, ҡарунланыу билдәһе!

- Ҡарбуз минең бирән ҡорһаҡҡа кәрәкмәй.

- Кемгә улайһа?

- Әлмәғиҙә ҡарсыҡҡа.

Батырйән уйланғандай итте:

- Бер аҙ аңлашылды һымаҡ. Тик бер генә нимә башыма барып етмәй, ҡартәсәйем үткәндә аштан уҙған ул, тигәйне лә, бер аяғы түрҙә, икенсеһе гүрҙә, тип тә өҫтәгәйне.

- Әле генә унан килеп ултырам. Бер ҙә бирешмәгән, сәләмәтләнер, ти өләсәйем, ә һин аштан уҙған тигән булаһың, уның үткәндәге аштан уҙған тамағы бөгөн ҡарбуз таптыра, шулай булғас, йәшәр әле!

- Алай икән...

- Шулай шул, бар юлыңда бул, түрә малайы!

- Янмай тор әле, давай, былай итәбеҙ...

- Ҡайһылай?

- Һаҡмарҙың теге яҡ ярында, ике йыл инде Михайловка урыҫы баҡса тота. Абайлағаның барҙыр?

- Сәүелле туғайға еләккә барғанда асыҡ күренеп тора бит.

- Башҡа йәшелсәләрҙән тыш, ҡарбуз ҙа үҫтерә теге.

- Баҡсала нимә үҫкәнен ҡайҙан беләһең?

- Был донъяла мин белмәгән берәй нимә бармы икән? Ер аҫтында йылан көйшәгәнен һиҙәм ул, абзыйың!

- Унда ҡараулысы барҙыр.

- Булһа ни!

- Ул бушлай тотторор ебәрмәйәсәк, һатып алырға, билдәле, аҡса кәрәк.

- Ә нишләп һатып алырға, аҡса тәҡдим итергә, уның һыналған үтә лә ябай әмәле бар.

- Ниндәйерәк әмәл?

- Улайтып тәүфиҡлы итеп ҡарама миңә, ҡараңғы төшөү менән барабыҙ ҙа сәлдерәбеҙ!

- Урларға, тимәк? Мин ҡараҡ түгел!

- Мин дә! Ҡарайым да, - Батырйән ҡылыйыраҡ ҡараған уң күҙен турайтып мине тәү тапҡыр осратҡан кешеләй баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе, - тағы ла бер ҡарап ҡуям, аҡыллыға тиңләп яңылышҡанмын, бәхтиһән, һин шыр тиле икәнһең дә баһа. Урлау ул иң әүәл насар ниәттән эшләнә.

- Ә беҙҙең ниәт ниндәйерәк һуң?

- Яңы ғына әйттең дә баһа, ҡарбузды үҙебеҙгә түгел, ауырыу өсөн алабыҙ. Изге уй менән һорауһыҙ ҡылынған ғәмәл сәлдереүгә инә, ул эште Хоҙай Тәғәлә күреп торһа ла гонаһһыҙ ҡылынған ғәмәлдә кисерә һәм ғәфү итә! - Батырйән шулай тине лә, ғәҙәтенә ярашлы әйткәндәрен раҫлап, һуҡ бармағын юғарыға сәнсте.

- Юҡ-бар лыбырҙап, башты бутама, йәме? Урлау, сәлдереү, айыу майы һөртөү һәммәһе лә уғрылыҡ хисабында.

- Ярай, һиненсә булһын, сәлдерәмме, урлайыммы, йыпырам, йомаммы, йәшерәмме - уныһы минең эш. Ә һин миңә, мулланың һимеҙ бохар бесәйе, уңыштар телә. Пока, иртәгә осрашҡанға тиклем!

Апаруҡ ара киткән Батырйәнде ҡыуып етеп, ененән тарттым:

- Тукта әле, ней, мин риза, тик бер генә шартым бар.

- Ниндәй шарт ул тағы?

- Һаҡмарҙың теге яҡ ярында йөрөп ҡайтҡандан һуң һин минән мулла бесәйе ҡушаматын алып ташлайһың.

- Нишләп уны алып ырғытырға, мулланың изге малы иҫәбендә йөрөү шәп тә баһа. Ҡушамат - һыпырып ташлап булмай торған нәмә ул. Быны мине күп бытылдағас, Бытбылдыҡ, тиҙәр. Тиһендәр, иҫем дә китеп бармай әле!

- Шулайын шулай, әммә мулла малы бурлыҡ менән шөғөлләнмәй.

- Әҙерҙе хәҙер, бушлай йыпыра, тимәксеңме, ярай, һиненсә булһын! Улайһа мин барып әйләнермен теге баҡсаға, ә һин ситтән күҙәтеп кенә торорһоң.

- Юҡ инде, бергә булғас бергә!

- Риза. Айыу балаһын да бейергә өйрәтәләр, иртәгәнән ҡушаматыңды үҙгәртәм, әгәр матур итеп, ерене еткереп урлаһаң!

(Дауамы. Башы 39-сы һанда).

✓ ***"Тормош үрҙәре яңғыҙ үрләнмәй. Ғаиләлә бәхетле булғың килһә, тәүҙә яртыңды баҡ, уға ныҡ иғтибарыңды бүл, йөрәк йылыңды йәлләмә. Бәхетле булыр өсөн кемделер бәхетле итергә кәрәк..."***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# МАҠСАТЛЫ, ТИМӘК, СӘЛӘМӘТ

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Бостондың Бригама госпитале тикшеренеүселәре ир-егеттәргә поливитаминдар ҡабул итергә кәңәш бирә. Улар әйтеүенсә, әгәр ҙә оло йәштәге ир-ат даими рәүештә мультивитаминдар эсһә, яман шеш хәүефе күпкә түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Майкл Гациано аңлатыуынса, әлегә тиклем поливитаминдар ҡабул итеүҙең файҙаһы тикшерелмәгән булған. Шуға ла ғалимдар ун йыл дауамында 50 йәштәр самаһындағы 15 мең ир-егетте тикшергән. Уларҙың бер өлөшө ун йыл буйына поливитаминдар эскән, ҡалған яртыһына ялған "буш" таблеткалар бирелгән. Һөҙөмтәлә, беренсе төркөмдә икенсеһенә ҡарағанда онкологик сирҙәр һирәгерәк осраған. Әммә әлегә был тенденция 50-не үткән ирҙәргә генә ҡағыламы, юкмы икәне асыҡланмаған, шуға ла тикшеренеүҙәр һаман дауам итә.

■ Варвик медицина мәктәбе үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йәшелсә-емештәр үҙенде бәхетле тойоу өсөн дә кәрәк. 80 мең британлының рационын анализлап, ғалимдар шундай фекергә килгән: йәшелсә һәм емеш-еләк яратыусылар тормоштан да ҡәнәғәт була, үҙен бәхетлерәк тә тоя, шуға уларҙың психик сәләмәтлеге лә яҡшыраҡ. Кеше ни тиклем күберәк йәшелсә-емеш ҡуллана, ул үҙен шул тиклем яҡшыраҡ тойған. Әммә был фактты йәшелсә һәм емештәрҙе күберәк ашау тормоштоң сифатын яҡшырта, тип аңларға кәрәкмәй, тип иҫкәртә ғалимдар. Бары тик бәхетлерәк кешеләр былай ҙа файҙалы ризыҡтарҙы йышыраҡ ҡуллана.

■ Стресс ваҡытында ҡаһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, беренһенә ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡаһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡаһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡаһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Ғалимдар раҫлауынса, С витамины остеопороздан яҡшы һаҡлай. Glob-news яҙыуынса, тикшеренеүҙәр ҡомаҡтарҙа үткәрелгән. Ике ай дауамында С витамины менән байытылған рационы ҡомаҡтарҙың һөйәктәренең тығыҙлығы элеккесә һаҡланған. Был витаминһыҙ ҡалған йәнлектәр төркөмөндә һөйәк тығыҙлығы түбәнерәк булған. Белгестәр тәүге төркөмдөң һөҙөмтәһе С витаминына бәйле булыуын белдерә.

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

**Күптән түгел Сибай ҡалаһында йәшәгән Әбдрәшитов Риза Ғәкиф улын Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова "Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәте өлкәһендә күп йылдар намыҫлы эшләгәне өсөн" тип билдәләп, Маҡтау грамотаһы менән бүләкләне. Быйыл алтмыштың бишен имен-аман тултырған ошо синыфташым хаҡында һүҙем.**

# БӘХЕТЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

## үҙең дә кемделер бәхетле ит!



Сибай ҡалаһы урамы буйлап 9-сы май көнөндә "Үлемһеҙ полк" колоннаһы сафында килгәндә сираттағы мәртәбә осраткайным уны. Ҡулына атаһы Ғәкиф Фәйзрахман улының ҙурайтылған фотоһүрәтен тотҡан ине Риза. Байтаҡтан бирле күрмәгән һабаҡташым менән бер туғандар һымаҡ ҡосаҡлашып күрешеп алғас, ҡулындағы портретҡа ныҡлап иғтибар иттем һәм "Атаһына былай уҡ та оҡшар икән кеше!" тип хайран ҡалдым. Әйтерһең, класташым үҙенең һүрәтен тотоп тора.

Бер аҙ хәл-әхүәлдәр һорашып алғас, әлбиттә, әлеге портреттағы яугир ағай хаҡында ҡыҙыҡһындым. Бөйөк Еңеүҙе яҡынлатҡан меңәрләгән ватандаштарыбыҙ араһында булған атаһын ғорурланып иҫкә алды Риза. Шул саҡта "Бөйөк Ватан һуғышы ордены", "За отвагу", "За боевые заслуги" һәм башҡа күп миҙалдар кавалеры булған Ғәкиф ағайҙың улы - Ризаның үҙенең дә маҡтауға лайыҡ кеше булыуы тураһында уйланып алдым. Яратҡан гәзитебеҙ аша яҡташтарыма уның эшен, ғаилә тормошон бәйән иткем килде. Өлгөлө ғаилә башлығы, эшендә арыу-талыу белмәгән үҙенсәлекле ошо синыфташым хаҡында ишетә йөрөгән кеше булараҡ, уның хәләл ефете Нурзиә менән әңгәмә ҡороуҙы кәрәк тип таптым. Икеһен дә бала саҡтан яҡшы белә инем, әлбиттә (әйткәндәй, Нурзиә лә минең класташ). Әммә һәр кемде уның менән оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән тормош иптәшенән дә яҡшыраҡ белгән һәм унан да дөрөҫөрәк баһа бирә алған бүтән кеше булмауы көн кеүек асыҡ. Шуға күрә Нурзиә ханымдың үҙенән Ризаның ниндәйерәк шәхес булыуы хаҡында һөйләп китеүен һораным. "Риза менән мин ғүмерем буйы риза булып ҡына йәшәйем. Тыныс холоҡло, сабыр, һәр тарафтан төплө белемле, кешеләргә иғтибарлы, ярҙамсыл, ышаныслы. Балалары өсөн, минең өсөн бар булмышын фиҙа ҡылырҙай был кеше менән юл үтеүе еңел, уның менән мин сикһеҙ бәхетлемен..." - тип башлап алып китте ул һүҙен.

Үҙенең яҡыны - эшһөйәр ире хаҡында хисләнеп-хисләнеп, байтаҡ ҡына нәмәләр һөйләне Нурзиә. Мәҙәниәт өлкәһендә эшләп, әлегелә юғары наградаларға, маҡтауға лайыҡ булған кешеләрҙе беҙ, әлбиттә, халыҡ алдында һәр саҡ күренеп, йөҙөн күптәр танып белгән артист халҡы араһында күреп ғәҙәтләнеп киткәнбеҙ. Әммә мәҡәләмдең төп геройы Риза беиеүсе йә йырсы, музыкант та, актер йә һүҙ оҫтаһы ла түгел. Киреһенсә, бик аҙ һүҙле, ғәжәп баҫалҡы был иптәш ҡырҡ йылдан ашыу Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрында автобус водителе булып эшләй. Үҙ һөнәрен, йәғни, машинаһын "биш бармағы" һымаҡ белгән был кешенең ышаныслылығы тиҫтәләгән йылдар буйы иҫбатланған. Үҙ эшенә һәр саҡ намыҫлы ҡараған Ризаға тапшырылған техникаһы уның оҫта ҡулында һәр саҡ төҙөк хәлдә була. Театр артистарын йыш ҡына төрлө районларға гастролдәргә алып йөрөү өсөн, әлбиттә, тап шундай кеше кәрәк тә.

Артист халҡының барыһы ла был водителгә тәрән ихтирам йөҙө менән ҡарай. Сибай театрында элегерәк эшләп киткән күп кенә сәхнә оҫталары ла уның хаҡында тик яҡшы фекерҙә. Башҡа ҡалаларға гастролдәргә йөрөгән актерҙар йыш ҡына унда бала-сағаларын ҙҙәре менән алырға мәжбүр. Ана шул мөхиттә үҫкән һәр баланың "үҙен ултыртып йөрөткән Риза ағай"ҙы яҡын күреүе лә ғәжәп түгел. Бала күңелле был водителде бәләкәстәр айырыуса ярата.

Риза 1957 йылда Баймаҡ районы Юлыҡ ауылында Ғәкиф һәм Зөбәржәт ғаиләһендә донъяға килә. Бала сағынан эшкә егәрле, аҡыллы, әҙәпле булып үҫә. Бер аҙ "кул аҫтына инә" башлағас, өй эштәрен урын-еренә еткереп үтәгән малай һәр саҡ эшһөйәр атаһынан үрнәк алырға, уға оҡшарға тырыша. Хатта күрше-тирәгә лә ярҙам итеүҙе үҙ бурысы итеп һанай малай. Ҡыштарын, ат егеп, алыҫ ҡына ятҡан ҡоҙоҡтан ауылдаштарына һыу ташыуҙы ғәҙәт итеп ала. Мәктәптә лә тырыш, өлгөлө тәртипле, спорт алдынғыһы була Риза. Туғыҙынсы синыфҡа Баймаҡ интернат-мәктәбенә уҡырға килгәс, буласаҡ хәләл ефете - сибәр ҡыҙ Нурзиә менән таныша. Тажик-Афған сигендәге погранзаставала ике йыл хеҙмәт иткәндән һуң, үҙен әрмәнен көтөп алған Нурзиәһе янына ашҡынып ҡайта, шунда уҡ уға өйләнешергә тәҡдим яһай. Әле институтын тамамлап та бөтмәгән ҡыҙ ҙа никах тәҡдимнәренә ҡаршы булмай. Мәктәптә һәләтле уҡыусы булыуына ла ҡарамаҫтан, башҡаларҙың да вузға инергә өгөтләүенә иғтибар итмәйенсә, Риза үҙенең яратҡан водитель кәсебенә тотона. Етемлектә үҫкән хәләл ефетенә уҡыуҙы тамамларға ярҙам итеүҙе үҙенең беренсе бурысы тип һанай. Ниһайәт, уның Нурзиәһе дипломы һөнәрмән булып сыға, Сибай ҡалаһына эшкә тәғәйенләнә. Шул мәлдән алып Риза драма театрына автобус йөрөтөүсе булып эшкә урынлаша һәм бөгөнгә көнгәсә шул яратҡан эшен дауам итә..

Баштараҡ әйткәндәй, мәҡәләмдең төп маҡсаты - халыҡ күҙенә ҡапылда күренә һалып бармаған, әммә йәшәйешебеҙ өсөн ифрат та мөһим булған ябай эшсәндәрҙең береһе хаҡында һөйләү булғанға күрә, Ризаның хәләл ефете тураһында мәғлүмәт биреүҙе юрый иң аҙаҡҡа ҡалдырҙым. "Тормош үрҙәре яңғыҙ үрләнмәй. Аллаһ насип иткән ҡушағың менән бергә ғүмер юлын үтәһең. Ғаиләлә бәхетле булғың килһә, тәүҙә яртыңды баҡ, уға ныҡ иғтибарыңды бүл, йөрәк йылыңды йәлләмә. Бәхетле булыр өсөн кемделер бәхетле итергә кәрәк..." Был ялҡынлы һүҙҙәрҙе әйтеүсе лә - Ризаның ҡатыны. Сәхнәлә уйнаған үҙенең ролдәре менән күптәрҙе таң ҡалдырған, Башҡортостандың халыҡ артисы Нурзиә Әбдрәшитова ул! Әле булһа театрҙа эшен дауам итә.

"Ситтән ҡарағанда, һеҙҙең тормошоғоҙ һәр саҡ ал да гөл, бер ниндәй ҙә ҡытыршылыҡһыҙ, бәғзе ваҡыт сәхнәләрҙә күрһәтелгән саф мөхәббәт тантана иткән ғаиләләге һымаҡ. Был - ысынбарлыҡмы?" тигән һорауыма Нурзиә ханым ошолайыраҡ итеп яуап бирҙе: "Бындай һорауҙы биререгә шикләнмәгәйнем. Һәр саҡ бөтә нәмә шыма ғына бара тиһәң, әлбиттә, бер кем дә ышанмаясаҡ. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк. Ҡайһы саҡта килтереп-килтереп тормоштоң "арт һабағын" уҡытҡы килә. Шатлыҡ менән йәнәш ҡайғы ла, уңышлылыҡтар менән бергә уңышһыҙлыҡтар ҙа булғылауы - тәбиғи. Һау-сәләмәт йөрөгән ерҙән, бәғзе ваҡыт, сирләп тә китәһең. Әммә, мин үҙем ғаиләлә сабырлыҡты иң беренсе кәрәк нәмә тип һанайым. Сабыр була белеп, һәр нәмәгә объектив ҡараш менән баҡып, бер-береңә ҡарата гәҙел булырға тырышһаң, бөтә ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға була. Артист - ижад кешеһе. Сәхнәлә көлөп-йылмайып йөрөүенә ҡарамаҫтан, артист булыуы еңелдән түгел. Уның янында һәр саҡ уны аңлаусы, яҡлаусы, хәстәрләүсе яҡыны булыуы мөһим. Әлхәмдүлилаһ, Ризам минең тап ана шундай кеше. Ул мине бына ошолай бәхетле иткән һымаҡ, үҙем дә уны бәхетле иткәнмендер, тигән инаныуҙамын әле".

Бына ошо бәхетле пар ике ул үҫтергән. Икеһе лә юғары, махсус белемле. Бала саҡтан уҡ һәр төрлө спектаклдәрҙең ваҡ эпизодтарында ҡатнашҡылап йөрөп үҫкән икән малайҙар. Бөгөнгә көндә өлкәне Илгиз әсәһе менән бергә шул уҡ драма театры артисы булып эшләй. Ә өйоштороусанлыҡ һәләтенә эйә булған кесе улдары Илнур - театрҙың директоры ("Кинйә улығыҙ барығыҙға ла хужа булып алған икән" тип шаяртам был һабаҡташтарымды). Уландар ҙа, атаһы һымаҡ, өлгөлө ғаилә башлыҡтары. Икеһе лә дәртләнеп, бынамын тигән йорт һалып ята, хәләл ефеттәре менән татыу ғаилә ҡороп, бала-саға үҫтерә.

Халҡыбыҙҙа тәү ҡарауҙа бер-береһенә ҡапма-ҡаршы һымағыраҡ яңғыраған ике әйтем йөрөй. Бәғзе берәүҙең, уңайын тура килтереп: "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын", - тип әйткәнен ишеткәнем бар. Ә икенселәр: "Ҡатынды йәҙәк ҡашы иткән дә, мунса ташы иткән дә - ир", - тип тә ебәрә. Әммә күләмлерәк итеп фекерләһәк, халҡыбыҙҙың был ике аҡыллы фекере тик бер-береһен тулыландырып ҡына килә, тип һанарға була. Шуға күрә лә уларҙы берләштереп күрһәтергә тырыштым. Бер-береңә ышаныслы терәк, береһе "силәк", ә икенсеһе - "ҡапҡас", береһе "ут" булған саҡта, икенсеһе мотлаҡ "һыу" булып, үҙ-ара "көлепләшеп", ғүмер буйы бергә тормош көткән бына ошондай матур ғаиләләрҙең күберәк булыуын теләр инем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

**✓ Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.), һис шикһеҙ, үҙ эшенә иҫ киткес бирелгән шәхес, вәғәзсе, аҡыллы һәм төплө сәйәсәтсе була. Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) кешелек тарихында һуңғы бәйғәмбәр тип әйтелә.**



*ХӘТЕРЛӘП...*

# АРҠА ТЕРӘР ДИРЕКТОРЫҢ БУЛҺЫН...

**Быйыл йәй 1977 йылда Баймаҡ районы Беренсе Этҡол урта мәктәбен тамамлаусыларҙың осрашыуы булып үтте. Мәктәбебеҙҙе, класташтарыбыҙҙы һағынып, ашҡынып барҙыҡ. Кисә барышында Әлфиә Юлдашбаева, мәктәптә уҡыған саҡтағы ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрәйек әле, тип иғлан итеп, директорыбыҙ Әхмәҙулла Хәйривара улы Хәсәнов менән булған, хәҙер инде лаҡапҡа әүерелгән бер хәлде һөйләп көлдөргәйне. Тап ошо директорыбыҙ тураһында миндә лә бар ине ҡыҙыҡлы бер ваҡиға, әммә осрашыуҙа һөйләргә форсат теймәгәс, гәзит уҡыусылар менән бүлешмәксемен.**



Әхмәҙулла Хәйривара улы беҙҙе физиканан уҡытты. Бер дәрестә уҡыусы мәсьәлә сисергә таҡтаға сыҡты ла, усына яҙылғанды күсереп яҙа башланы. Уҡытыусы уның был ҡылығын күреп ҡалды ла, беҙгә ҡарап, бармағын ирененә терәп, һул ҡулының усына уның күрһәтмә бармағы менән сыйып, "Шым, өндәшмә!" тигән ишара яһаны. Класташыбыҙ усына яҙылғанды таҡтаға күсереп бөткәс, Әхмәҙулла Хәйривара улы: "Эйе, мәсьәләне дөрөҫ систең, маладис, ултыр", - тине һәм беҙгә боролоп: "Класташығыҙға нисәле ҡуяйым?" - тип һораны. Беҙ бер тауыштан "Бишле!" тип ҡысҡырҙыҡ. Уҡытыусыбыҙ класташыбыҙҙың көндәлегенә, класс журналына "бишле" билдәһе ҡуйып, беҙгә күрһәтте лә: "Мин һеҙҙе тыңлап, уға "бишле" ҡуйҙым, бынан был яғына һеҙ ҙә мине тыңларға тейешһегеҙ, аңланығыҙмы?" - тигән һығымта яһаны. Артабан беҙҙең мөнәсәбәт үҙара тыңлашыуға, дуҫлыҡҡа ҡоролдо.

Тәжрибәле педагогтың иҫ киткес тәрбиә ысулы булды был, ғүмер буйына онотолоҡ түгел. Ғөмүмән, Әхмәҙулла Хәйривара улы үтә ихлас кеше булды, кешеләргә дуҫлыҡ ҡулын һуҙа белде. 2007 йылда класташтарыбыҙ менән мәктәпте тамамлауға 30 йыл тулыуға арналған осрашыуыбыҙҙа мин уның менән арҡаға арҡа терәп ултырып, фотоға төшөп, был хәлде "Арҡа терәр директорың булһын ул!" тип атағайным.

Ул Муллаҡай урта мәктәбендә директор булып эшләгән сағында ошо ауылда тыуып үҫкән шағир, яҙыусы Аҫылғужа Баһумановтың юбилей тантанаһына барырға тура килгәйне. Кисә үткәс, мине йортона ҡунаҡҡа алып ҡайтырға тип Әхмәҙулла Хәйривара улы килде. Өфөнән килгән яҙыусылар уның мине алып китеүенә теше-тырнағы менән ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, директорым улар менән һүҙгә килешеп булһа ла: "Һеҙгә дуҫ булһа, ул минең уҡыусым", - тип барыбер алып ҡайтып китте. Ана шундай, алдына алғанын ҡуймай торған ныҡышмал, тәүәккәл кеше булды ул.

Вафатына тиклем бер нисә тапҡыр осраштыҡ, һәр ваҡыт "Арҡа терәр директорың булһын!" тигәндә иҫкә төшөрөп көләштек. Донъялар үҙгәреп нәҫел-нәсәпкә, шәжәрәгә иғтибар артҡас, Әхмәҙулла Хәйривара улы менән бер заттан булыуыбыҙҙы аңлау беҙҙе тағы ла яҡынайтты. Хикмәтле, тылсымлы зат та ине Әхмәҙулла ағай. Әгәр ҙә дин ҡанундары хөкөм һөргән заманда йәшәгән булһа, моғайын да, кешеләрҙе һүҙе, доғаһы, ырымы менән һауыҡтырған абруйлы хәҙрәт тә булыр ине ул. Һәр хәлдә, булмышына был сифаттары яҙылғайны.

Әйткәндәй, Әхмәҙулла ағайҙы Уҡытыусылар көнө менән йыл да ҡотлай торғайным. Шуға ла тап ошо байрам көнөндә уның тураһындағы йылы хәтирәләрем яңырҙы. Һәм байрам менән һунлабыраҡ булһа ла ҡотлап, барлыҡ уҡытыусыларға ла "Уҡыусыларығыҙ өсөн арҡа терәр уҡытыусы, дуҫ, иптәш булығыҙ!" тип өндәшке килде.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР



**Ислам диненең ҙур байрамдарының береһе - Мәүлит кисәһе, икенсе төрлө ул "мәүлиден-нәби", йәғни "Бәйғәмбәрҙең тыуыуы" тип тә атала. Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тыуған көнө аныҡ билдәле булмау сәбәпле, уның вафаты көнө, йәғни 12-се рабиғел-әүүәл көнө, тыуған көнө итеп тә билдәләнә.**

Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) 570-се йылда тыуып, сабый сағында етем ҡалып, бик ауырлыҡта үҫә һәм үҙенең тыуған көнөн хәтерҙә ҡалдырырлыҡ булмай. Рабиғел-әүүәл айында, ғәҙәттә, мәсеттәрҙә вәғәҙҙәр уҡыла һәм йәмәғәт менән ғибәҙәт ҡылыуҙар уҙғарыла, мосолмандар өйҙәрендә дини мәжлестәр ойошторалар.

Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.), һис шикһеҙ, үҙ эшенә иҫ киткес бирелгән шәхес, вәғәзсе, аҡыллы һәм төплө сәйәсәтсе була. Ул бик белеп, хыял менән ысынбарлыҡты, бороңғо йолалар менән яңылыҡты тоташтыра. Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) кешелек тарихында һуңғы бәйғәмбәр тип әйтелә, уның үҙенә тиклем булған бәйғәмбәрҙәрҙен, йәғни Аллаһы Тәғәләнең өйрәтмәләрен һәм күрһәтмәләрен ер йөҙөндә таратыусыларҙың силсиләһен - сылбырын тәүәлләүсе бер быуын булыуы һәм унан һуң ерҙә башҡа бәйғәмбәр булмаясағы Ислам динендә ныҡлы билдәләнгән. Ҡөрьәндең "Сүратул-әнбийәи" тип аталған 21-се сүрәһенең 106-сы аятында яҡынса мәғәнәһе шулай: "Ике донъяның да мәрхәмәте өсөн Беҙ һине ебәрҙек-күндерҙек", - тип әйтелгән һәм ошо изге һүҙҙәргә нигеҙләнеп, бик күп дин ғалимдары Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) вазифаһын "донъя кимәлендә әһәмиәткә эйә вазифа" тип баһалай.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тормошо - һәр мөьмин-мосолман өсөн үрнәк, ғибрәт алырлыҡ тормош, һәм уның иң камил зат икәнлеге бик күп китаптарҙа телгә алына. Күп төрлө риүәйәттәргә ҡарағанда, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) тыуыуы тураһында әле Ибраһим, Исмәғил, Муса һәм шулай уҡ Ғайса бәйғәмбәрҙәр тарафынан алдан әйтелгән.

Риүәйәттәргә ҡарағанда, Мөхәммәттең (с.ғ.с.) "нурын" Аллаһы Тәғәлә донъяны барлыҡҡа килтергәндә үк булдырған, ә уның ерҙә тыуымышы-барлыҡҡа килеше мөғжизәләр ярҙамында булған. Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) әсәһе - хәҙрәти Әминәнең яныңа Мөхәммәтте (с.ғ.с.) табыр алдынан һәм тапҡан ваҡытында ғәжәйеп матур, иҫ киткес нур ингән; Мөхәммәт (с.ғ.с.) тыуғанда бороңғо ғәрәптәрҙең ир-ат һынлы Хубал һәм ҡатын-ҡыҙ һынлы Лат исемле табына торған мәжүси илаһтарының таш һындары дөбөр-шатыр ергә ауып төшкән, Ирандағы утҡа табыныусыларҙың ғибәҙәтханаһында ут һүнгән. Уның тормошонда ла, йәғни бәйғәмбәрлегендә лә мөғжизәләр юлдаш булған. Уға хатта Мәккә сүллегендә таштар ҙа сәләм биргән. Ғәжәйеп рәүештә күккә ашыуы да шул турала һөйләй.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ана шундай сифаттарын маҡтап, мәдхиә йырлап Мәүлит байрамында күп төрлө ҡасидәләр уҡыла. Был байрам донъяның мосолмандар йәшәгән төрлө ерҙәрендә төрлөсә байрам ителә, һәм шуныһы ла иғтибарға лайыҡ, уны һәр халыҡ үҙенсә маturлап, үҙенсә ололап, үҙенсә ҡәҙерләп үҙғара. Шунлыҡтан, ул мосолман халыҡтарының ерле төҫ биреп байытылған ысын халыҡ байрамы булып киткән.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Ысын бөйөклөк

Бер ваҡыт бөйөк футболсыны ике кешене үлтергәне өсөн хөкөм итәләр.

Ҡасандыр бөйөк йәмәғәт эшмәкәре мәрхәмәтлек фонды аҡсаһын тотоноп бөтөүҙә ғәйепләнә.

Ҡасандыр бөйөк дин әһеле йәш балаларҙы аҙҙырғаны өсөн хөкөм ителә.

Бөйөклөк нимәне аңлата? Күрәһең, ул ниндәйҙер тиҙ үҙгәреүсән сифат: бөгөн бар, иртәгә юҡ. Әммә ысын бөйөклөк һәр ваҡытта ла була, ул иллюзия түгел.

Ғайса бәйғәмбәр, ғәҙәти булмаған кешеләр юҡ, беҙ барыбыҙ ҙа Аллаһ балалары, ти. Шулай булғас, ниңә бөйөклөккә ынтылырға? Яҡшы һорау.

Яуап тормош көҙгөһөндә сағыла: беҙ, ысынлап та, һүҙҙең ябай мәғәнәһендәге бөйөклөккә ынтылырға тейеш түгелбеҙ. Бөйөк герой булырға хыялланырға ярамай.

Әгәр, башҡаларға ярҙам бөйөклөккә юлда хаҡ аҙым булып тора, тиһәм, яңылыҡ асмам. Бында һүҙ оло йәштәге кешегә юлды аша сығырға ярҙам итеү тураһында бармай. Башҡаларға ярҙам мәрхәмәтлек фондының килемен арттырыу оҫталығы йәки буш ваҡытыңды ҡарттар йортонда йәшәүселәргә ярҙам итеүҙән киңерәк мәғәнәгә эйә.

Аллаһы Тәғәләнең ярҙам итеп һуҙған ҡулы булығыҙ. Нимәне хаҡ тип иҫәпләйһегеҙ, шуны яҡлағыҙ. Бәлки, был ниндәйҙер өҫтөнлөктән мәхрүм итеүсе, ләкин ниндәйҙер сикләүҙәрҙән азат итеүсе берәй популяр булмаған хәрәкәттер. Уҙған быуатта бындай хәрәкәттәрҙең береһе профсоюздар менән эш биреүселәрҙең гармониялы мөнәсәбәте хәрәкәте була. Ул, кем хаҡлы, тигәнгә түгел, ә нимә дөрөҫ, тигән ҡарашҡа нигеҙләнә. Популяр булмаған эшмәкәрлеккә ҡатнашыу һәр саҡ ҙур ҡыйыулыҡ талап итә. Ышаныслы аҡламаған кешеләр, ғәҙәттә, нахаҡҡа мөрәжәғәт итә, ләкин хаҡ эштәр асылғас һәм Илаһ килеп ҡатнашҡас, барыһы ла урынына ултыра.

Үҙендең айырым ишегенә һүкмаҡ ҡына һалмаған, ә ҙур әжер килтергән Бөйөклөктөң икенсе яғы ла бар. Белгәндәрегеҙҙе үҙегеҙҙә һаҡламағыҙ, уларҙы йәлләмәй таратығыҙ. Оҫталығығыҙҙы даими арттырығыҙ. Һәләттәр - Ижадсының бүләге, уға үҙенең бүләген һаңға һүкмауҙары һис тә оҡшамай.

Кем тормошҡа "эйе" ти, ул рухи "герой"ға әйләнә. Кем бер ваҡытта ла өйөнән йәки фатирынан сыҡмай, унда кешенең "юҡ" тип әйтеүсе миҫалы күҙәләнә. Ул Илаһҡа ла, уның яралтҡанына ла ышанмай.

Икенсе яҡтан, кем тормошҡа "эйе" ти, ул уйламаған йәки еңел-елпе аҙым яһамай, әммә һәр саҡ яңы кисерештәргә, яңы тойғоларға ынтыла, яңы кешеләр, быйаса ят булған ерҙәр менән таныша, яңы ҡыҙыҡһыныуҙар таба, сит тел йәки яңы спорт төрөн өйрәнә. Бындай кеше Илаһҡа шатлыҡ килтерә, тормоштан мөмкин булғанды барыһын да ала.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 10 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Алешкина любовь". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 БашГост. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Патриот РФ. [12+]**
**18.00 Финликбез. [12+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**1.45 Спектакль "Таганок". [12+]**
**3.30, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.15 Автограф. [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Ете егет". [12+]**

## 11 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Х/ф "Первая Республика". [12+]**
**9.00, 13.00, 18.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**9.15 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Историческая среда. [12+]**
**10.00, 11.45, 13.15, 14.15, 16.45, 17.45 "Мы вместе!"**
**11.30, 14.00, 16.30, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00, 23.30 Открытие памятника герою России Минигали Шаймуратову.**
**15.00, 1.00 Торжественное собрание, посвященное Дню Республики.**
**17.30 Специальный репортаж. [6+]**
**19.00 "Время героев". Фестиваль патриотической песни .**
**22.30 "Башҡорт йыры". [12+]**
**2.30 Спектакль "Древо жизни". [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Хазина о хазине. [12+]**

## 12 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Алешкина любовь". [16+]**
**11.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 5.00 История одного села. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**18.00 Финликбез. [12+]**
**19.00, 23.15 Вечерний телецентр (на баш.яз).**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр (на русс.яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**0.45 Вечерний телецентр (на рус.яз). [12+]**
**1.45 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**4.15, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**

## 13 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона".
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Алешкина любовь". [16+]**
**11.00, 22.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Ай текә. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Финликбез. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород). КХЛ.**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Честно говоря". [12+]**
**1.45 Спектакль "Салават". [12+]**
**4.15, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**5.00 История одного села. [12+]**

## 14 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Яблочко от яблоньки". [12+]
4.10 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Алешкина любовь". [16+]**
**11.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости**
**11.45, 14.45, 16.45, 19.00 Интервью. [12+]**
**12.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**12.45 Патриот РФ. [12+]**
**13.00 БашГост. [6+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Йома". [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**15.45 "Гора новостей". [6+]**
**16.00 История одного села. [12+]**
**16.15 История признания. [12+]**
**17.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**18.00 Финликбез. [12+]**
**19.15, 5.15 "Честно говоря". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]**
**3.15 "Автограф". [12+]**
**4.15 "Млечный путь". [12+]**

## 15 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Т/с "Затмение". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Девятый вал". [12+]
21.05 Х/ф "Радуга в поднебесье". [12+]
4.10 Х/ф "Искушение". [16+]
5.31 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 12.30, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 3.30 Автограф. [12+]**
**8.15 БашГост. [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 "Созвездие талантов". [6+]**
**12.00 "Это моя профессия". [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00, 6.15 История одного села. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**19.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00, 2.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Земляки". [12+]**
**4.00 Колесо времени. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 16 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.35 Х/ф "Мой чужой ребенок". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.55 Т/с "Затмение". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Не говори мне "Прощай!" [12+]
3.10 Х/ф "Мой чужой ребёнок". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 "Бай". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.45, 3.30 История одного села. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 3.00 Историческая среда. [12+]**
**16.30, 4.45 "Честно говоря". [12+]**
**17.15 Полезные новости. [12+]**
**17.30 "Елкән". [6+]**
**19.15, 1.45 Д/ф "Рождение истории".**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж.**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+
**13 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+
**14 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**15 октябрь "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 18.00 12+
**16 октябрь "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.), провинциаль проза. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 октябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 12+
**13 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 10.00 6+
**14 октябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 12+
**15 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 6+
**16 октябрь "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**11 октябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**15 октябрь "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+
**16 октябрь "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 октябрь "Орган плюс саксофон"**. 6+
**12, 15 октябрь** IV Бөтә Рәсәй музыкаль конкурсы концерты. 19.00, 18.00 6+
**16 октябрь "На златом крыльце сидели…"** ғаилә өсөн концерт. 15.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 октябрь "России верные сыны"** концерт. 6+
**14 октябрь Премьера! "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 6+
**16 октябрь "Покатился мой клубочек"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Хушығыҙ, хыялдарым!"** (Ә. Атнабаев), драма. 18.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 октябрь "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин, З. Бураҡаева инсц.), драма. 16+
**15 октябрь "Три поросенка"** (З. Сөләймәнов инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**12, 13, 14, 15 октябрь "По истокам времени"** (З. Усманова), театрлаштырылған уйын тамашаһы. 10.00, 12.00 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (14) дүшәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:33 | 18:28 | 19:58 |
| 11 (15) шишәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:31 | 18:25 | 19:55 |
| 12 (16) шаршамбы | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 16:29 | 18:23 | 19:53 |
| 13 (17) кесе йома | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 16:26 | 18:20 | 19:50 |
| 14 (18) йома | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 16:24 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (19) шәмбе | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 16:22 | 18:16 | 19:46 |
| 16 (20) йәкшәмбе | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 16:20 | 18:13 | 19:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

## БАШҠОРТОСТАН - БАШ ИЛЕМ, ЙЫҺАНДАҒЫ БИШЕГЕМ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Вәлит. Әсирлек. Ботсвана. Күлдәк. Күркә. Борт. Йорт. Иртә. Бумала. Ун. Абыҙ. Кипу. Елем. Ләстит. Оҫта. Атака. Исем. Ҡыяр. Ҡуй. Жанр. Алҡа.

**Вертикаль буйынса:** Күзбәков. Берҙәм. Ут. Әтәлге. Әтәс. Сиражи. Ваба. Әлифба. Мамыҡ. Инк. Уҡра. Аҡтар. Атай. Тверь. Уҡ. Кинйәбулатова. Айсыҡ. Дәрт. Композитор.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЯҢЫ СИСТЕМАЛАР...

## ...мәктәптә

**2022 йылдың 1 сентябренән "Минең мәктәбем" федераль система һынау режимында Рәсәйҙең 15 төбәгендә индерелә, 2023 йылдың 1 ғинуарынан система бөтә илдә эшләй башлай.**

"Минең мәктәбем" федераль дәүләт мәғлүмәт системаһы - уҡытыусылар, уҡыусылар һәм ата-әсәләр өсөн берҙәм мәғлүмәт витринаһы. Уны илебеҙҙәге программа тәьминәте нигеҙендә әҙерләгәндәр, шуға күрә ул хәүефһеҙ. Был система тикшерелгән белем биреү һәм тәрбиәүи контентҡа, дәрестәр теҙмәһенә, өйгә эштәргә, баһаларға, журналға, "Сферум" базаһында видео-конференц-бәйләнешкә, файлдар һаҡлау һәм документтар менән эшләү өсөн "Облако" системаһына, хәүефһеҙ социаль селтәргә инеү мөмкинлеген тәьмин итә.

Яңы проект ярҙамында уҡыусылар сифатлы һанлы контентҡа һәм үҙ-үҙенде диагностикалау өсөн тест банкыһына инеү, класташтары һәм уҡытыусылары менән хәүефһеҙ социаль селтәрҙә аралашыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Уҡытыусылар эш процесын еңеләйтә ала, уларға бюрократик йөкләмә кәмей. Ә ата-әсәләр иһә баһаларға, журналға һәм дәрестәр теҙмәһенә инә һәм онлайн йыйылыштарҙа ҡатнаша аласаҡ.

## ...рекламала

**1 сентябрҙән интернет-рекламаны иҫәпкә алыу тураһында федераль закон үҙ көсөнә инде. Яңы системаға күсеү 31 октябргә тиклем дауам итәсәк. Бөгөнгө көндә рекламаны тамғалайҙар һәм һынау режимында иҫәпкә алалар.**

Тәү сиратта закон реклама етештереү һәм уны интернетта урынлаштырыу менән мәшғүл компанияларға һәм айырым кешеләргә ҡағыла. Ә бына заказсылар, туранан-тура продукт етештереүселәр һәм хеҙмәт күрһәтеүселәр өсөн уның "йомшағыраҡ" булыуы бар: улар реклама контракты тураһында отчёт бирергә тейеш түгел һәм мәғлүмәт тапшырыу хоҡуғын яҙмалар әҙерләгән һәм урынлаштырған подрядсыларҙың береһенә ышанып тапшыра ала.

Хәҙер бөтә процедура - реклама иғланына, баннерға, социаль селтәрҙәге түләүле яҙмаға йәки видеороликка заказ биргәндән алып ул интернетта баҫылғанға тиклем - яңы алгоритм ала, был иһә баҙарҙы асығыраҡ итәсәк.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ОҘАҠ ЙЫЛДАРҒА ЕТКЕР...

**Һаулыҡ йәш кешегә генә түгел, олоғайғас та бик кәрәк. Сәләмәтлегең булмаһа, тормошҡа ҡыҙыҡһыныуың да кәмей, кәйеф күтәренкелеге лә самалы була. Йәшәлгән йылдар, стрестар, экология, һис шикһеҙ, һаулыҡ торошонда етди эҙ ҡалдыра. Сәләмәтлекте, әүҙем йәшәү рәүешен нисек оҙаҡ йылдарға һаҡларға? Ошо һорау менән үҙәк район дауаханаһына мөрәжәғәт иттек һәм врач Маргарита Әнүр ҡыҙы УТИЦКАЯ менән бергә оҙон ғүмерлелеккә илткән бер нисә төп йүнәлеште барланыҡ.**

**Физик әүҙемлек.** Ул йәштәр өсөн генә түгел, өлкәндәр өсөн дә бик мөһим. Әүҙем, хәрәкәтсән кешеләрҙең йөрәк-ҡан тамырҙары, тын алыу системаһы яҡшы эшләй. Хәтере, аҡыл эшмәкәрлеге менән дә айырылалар. Координациялары һәйбәт була, тимәк, йығылып бармайҙар. Ундайҙар шулай уҡ күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелә һалып бармай. Физик күнегеү менән төркөмдә шөғөлләнеү яңғыҙлыҡтан да ҡотҡара. Шуға күрә оҙаҡҡа һуҙмай, врач менән кәңәшләшегеҙ ҙә бөгөн үк әүҙем тормош башлағыҙ.

**Дөрөҫ туҡланыу.** Оло кешеләрҙең күбеһенә аҙ калориялы ризыҡ ашарға тәҡдим ителә, сөнки өлкәнәйгән һайын матдәләр алмашыныуы кәмей, аҙыҡты үҙләштереү әкренәйә. Ә шәкәр диабеты, атеросклероз, подагра, эс ҡатыу, бауыр, бөйөр сирҙәре булғандарға диета - дауаланыу процесының айырылғыһыҙ өлөшө. Был тәңгәлдәге проблема буйынса ла диетолог йәки геронтолог менән кәңәшләшергә онотмағыҙ.

**Хәтерҙе яҡшыртыу өсөн күнекмә.** Бәхетле ҡартлыҡҡа өлгәшеү өсөн физик ныҡлыҡ та, аҡыл, йәғни хәтер ҙә кәрәк. Шулай уҡ йәмғиәт, туғандар, яҡындар менән бәйләнештә булыу мөһим. Олоғайған кешеләрҙең хәтере насарая, әммә уны нығытырға мөмкин. Мейе эшмәкәрлеген әүҙемләштереү өсөн күнекмәләр бар. Быны өсөн көн һайын кроссворд сисегеҙ, пазлдар төҙөгөҙ, китап уҡығыҙ, шиғыр, доға ятлағыҙ.

**Йоҡо.** Баш мейеһе ял итһен өсөн яҡшы йоҡо кәрәк. Эш барышында һәр сәғәт һайын ҡыҫҡа ғына тәнәфес эшләп алығыҙ, физик күнегеү эшләгеҙ. Эшмәкәрлектең бер төрөнән икенсеһенә күсеү мейе өсөн бик файҙалы.

**Стрестарҙан һаҡланығыҙ.** Күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә тырышығыҙ, тормоштоң һәр мәленән, миҙгеленән ыңғай яҡтарҙы табығыҙ.

**Хәүефһеҙ өй.** Йәшәгән урынығыҙҙың уңайлы булыуы бик мөһим. Эләгеп йығылмаҫ өсөн аяҡ аҫтында ятҡан сымдарҙы, әйберҙәрҙе алығыҙ, тая торған урынға балаҫ түшәгеҙ, ванна бүлмәһенә тотонор өсөн ҡулайламалар ҡуйығыҙ, төндә бәҙрәфкә бара торған урын яҡшы яҡтыртылһын!

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

✓ *Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең, яман менән өйҙәш булһаң, яу менән көн итерһең.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# САЛАУАТТАР КИЛӘ!

**Салауат башҡорт дәүләт драма театры өсөн яңы миҙгел иҫтәлекле датаға - театрҙың 90 йыллыҡ юбилейына арнала. Ошо ваҡиға уңайынан 19 октябрҙә театр коллективы Өфөгә юллана. Был юлы М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә Мөнир Ҡунафиндың "Кешелеккә тоғролоҡ" хикәйәһе буйынса "Тоғролоҡ" драмаһы күрһәтеләсәк. Инсценировка авторы - Зөһрә Бураҡаева, ҡуйыусы режиссеры - Лиана Ниғмәтуллина, ҡуйыусы рәссам - Юлиә Сиражетдинова, композиторҙары - Мәскәү ҡалаһынан Диләрә Ғәбитова, Лариса Субботина, хореографы - Өфөнән Ольга Даукаева. Баш ҡала тамашасыларының спектаклгә ҡағылышлы һорауҙарына яуап табыр өсөн театрҙың баш режиссеры Лиана НИҒМӘТУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**Ни өсөн баш ҡалаға сәфәрегеҙҙә тап ошо әҫәрҙе һайланығыҙ һәм унда нимә тураһында һүҙ бара?**

- Тәү сиратта әҫәрҙең темаһы ҡыҙыҡһындырҙы. Гонаһһыҙ кеше бармы икән был донъяла? Юҡтыр, моғайын. Әҫәрҙә лә тап ошо турала һүҙ бара. Уҡып сыҡҡас та әҫәрҙәге бик көнүҙәк фекер күңелде йылытты. Хикәйәлә Нәфисә һәм Иҙристең ғаилә тарихы бәйән ителә. Ситтән ҡараһаң, өлгөлө ғаиләлә барыһы ла яҡшы кеүек. Әммә уларҙың бер оло хәстәре бар: тиҫтә йыл бергә ғүмер кисерһәләр ҙә, балалары юҡ. Асыҡланыуынса, балаһыҙлыҡ сәбәбе ҡатынында түгел, ә ире Иҙристә. ЭКО эшләтеү ҙә файҙаһыҙ икәне асыҡлана.

Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ, балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫ, тиҙәр. Был хәҡиҡәттең әсеһен үҙ башынан үткәндәр яҡшы аңлай. Ғаиләлә сабый тауышы сыҡһын өсөн әҙәм балаһы ниндәй генә аҙымға бармаҫ. Нәфисә лә бик борсола һәм ошо хәлдән сығыу юлдарын эҙләп, бер генә тапҡыр хыянат итергә иренән рөхсәт һорай. Тейешле кандидатураны - йәш, әммә телһеҙ Рәсүлде табып та ҡуя. Серҙәрҙең барыһын да асып бөтмәйем, юғиһә, ҡыҙығы ҡалмаҫ. Нәфисәнең был аҙымға барамы-юҡмы икәнен, ҡылған гонаһтары өсөн уны ниндәй яза көтөүен спектаклде килеп ҡарағас белерһегеҙ.

Шуны билдәләп үтергә кәрәк: бындай темалар буйынса тыуған һорауҙарҙа аныҡ ҡына яуап юҡ, бары тик уйланырға ғына ҡала. Кемделер нимәгәлер өйрәтергә тигән маҡсат ҡуйылмаған, әммә уйланырға урын бар. Автор уҡыусыларға бер генә гонаһтың да язаһыҙ ҡалмауын, уның өсөн үҙенә булмаһа, балаларына яуап бирергә тура киләсәген аңғартырға теләй.

**Спектаклдә ниндәй үҙенсәлекле образдар сәхнәгә сығарыла һәм улар нисек һынландырыла?**

- Әҫәр тормошсан булғанға күрә, әллә ниндәй айырым костюмдар тегеү талап ителмәне. Әммә кешеләрҙән тыш, спектаклдә уларҙы яңылышлыҡҡа, ялғанлыҡҡа этәреүсе енпәрейҙәр, "ҡара көстәр" ҙә бар. Тап бына улар өсөн ғәҙәти булмаған костюмдар тегелде. Дөйөм алғанда, спектаклдә ҡатнашыусылар артыҡ күп түгел. Тамашасылар өсөн Нәфисә ролендә - Башҡортостандың халыҡ артисы Нәүфилә Яҡупова, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Наҙгөл Иҫәнбаева, Минзилә Ҡотошева, Иҙристе - Рамир Дәүләтбаев, Юнир Мансуров, Рәсүлде - Әмир Үтәбаев, Сара инәйҙе - Башҡортостандың халыҡ артисы Гөлфирә Сафиуллина, Хәсән ҡартты Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рөстәм Фазылов уйнай. Беҙҙең труппабыҙ яңы артистар менән тулыланды. Күмәк сәхнәләрҙә тап улар ҡатнаша ла инде: Лилиә Байгилдина, Элвира Йәрмөхәмәтова, Нәфисә Мәжитова, Йәнгүзәл Хәликова, Гөлфинә Ибәтуллина.

**90 йыллыҡ тарихы булған Салауат башҡорт дәүләт драма театрының Өфө ҡалаһында үтәсәк спектакленә килеп, фекер алышып, күңелдәрегеҙгә ял алып ҡайтығыҙ.**

**Динә БӘШИРОВА,**
**театрҙың әҙәбиәт бүлеге мөдире.**

*АФАРИН!*

# АСҠАРОВТЫҢ ФИЛЬМДАРЫ...



**Анапала 31-се тапҡыр үткәрелгән "Киношок" халыҡ-ара фестивале үҙ эшен тамамланы. Башҡорт режиссеры Айнур Асҡаровтың "Өс таған" фильмы "Актерҙар ансамбле һәм абсолют киногармония өсөн" тигән махсус бүләккә лайыҡ булды.**

"Киношок" фестивале сиктәрендә дүрт конкурс уҙҙы: тулы, ҡыҫҡа метражлы һәм телефильмдар. Рәсәй, Греция, Иран, Израиль, Ҡаҙағстан, Беларусь, Ҡырғыҙстан, Монголия һәм Үзбәкстандан эштәр күрһәтелде. Шулай уҡ "Киношок" фестивалендә продюсер Анастасия Асҡарова "Клюква Сталина" ҡыҫҡа метражлы уйын фильмын тәҡдим итте. Айнур Асҡаровтың "Буран" фильмында төшкән актер Михаил Сафронов фестивалдә жюри рәйесе булды. "Беҙ балалар киноһы секцияһында ҡатнаштыҡ, - тине Айнур Асҡаров. - Фильм Крымск, Абинск, Анапа һәм башҡа ҡалаларҙа күрһәтелде. Беҙҙе бик яҡшы ҡаршы алдылар. Бөтә ерҙә лә залдар балалар менән тулы ине, был фестиваль өсөн бик шәп. Жюри эшендә балалар ҙа ҡатнашты, һәр ҡалала үҙҙәренеке. Шундай ҡыҙыҡлы фестиваль. Фильмдар ҙа, тамашасылар ҙа күп, фестивалдең географияһы ла ярайһы уҡ киң. Саранан ныҡ сағыу тәьҫораттар алып ҡайттыҡ".

Әйткәндәй, күптән түгел Айнур Асҡаровтың "Йыл ғаиләһе" фильмы композиторы Камил Абдуллин да актер-режиссерҙарҙың Смоленскиҙа уҙған XV "Алтын Феникс" халыҡ-ара кинофестивалендә фильм геройҙарының үҙенсәлекле музыкаль характеристикаһы өсөн композитор Михаил Глинка исемендәге призды яулағайны.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУНАҠ КӨНӨ - ӨС,

## шунан артһа, хужаға көс

Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең, яман менән өйҙәш булһаң, яу менән көн итерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Барыһын да ярат, айырым кешеләргә генә ышан, бер кемгә лә яуызлыҡ эшләмә.

**(Уильям Шекспир).**

Әйҙәгеҙ, көс хәҡиҡәт яғында тигәнгә ышанайыҡ; ошо ышанысыбыҙ ысынлап та хәҡиҡәттең еңеүенә ярҙам итһен.

**(Авраам Линкольн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йәш кеше үҙен, мөхәббәттән уңманым, тип иҫәпләй. Тормош юлымда гел генә әллә ниндәй ҡыҙҙар осрай, ҡайһыһы бик йәмһеҙ, ҡайһыһы - аҡылһыҙ, ҡайһыһы - мыжыҡ, тип зарлана икән был. Идеаль ҡыҙҙы эҙләп арығас, егет бер аҡыл эйәһенә мөрәжәғәт иткән һәм уға үҙенең зарын түккән. Аҡыл эйәһе егетте иғтибар менән тыңлаған һәм шулай тигән: "Күрәм, оло бәләгә тарығанһың... Ләкин һин миңә башта шуны әйт: һин үҙеңдең әсәйеңә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттәһең?" Егет, аптырап: "Ә бында минең әсәйемдең ни ҡыҫылышы бар? - тип һораған. Шунан икеләнеп кенә һүҙен дауам иткән: - Әллә, белмәйем... Әсәйем йыш ҡына үҙенең ахмаҡ һорауҙары, бәйләнсеклеге, ялыуҙары һәм үтенестәре менән мине шартлар сиккә еткерә... Мин уны яратам тип әйтә лә алмайым шикелле..."**

**Аҡыл эйәһе баш сайҡап аптырап ултырғандан һуң, әңгәмәне дауам итә: "Хәҙер мин һиңә Мөхәббәттең иң төп серен асам. Мөхәббәт бар һәм ул һинең йөрәгеңә йәшеренгән. Һәм ул Мөхәббәт уңышы орлоғон һинең йөрәгеңә тормошоңдағы иң мөһим, иң ҡәҙерле кешең - әсәйең сәскән. Уға ниндәй мөнәсәбәт күрһәтәһең - донъялағы бар ҡатын-ҡыҙҙарға мөнәсәбәтең шундай буласаҡ. Сөнки әсәйең - ул һинең тәүге мөхәббәтең. Һине үҙ ҡосағына ҡыҫҡан, хәстәрләгән, ҡурсылаған тәүге ҡатын-ҡыҙ - ул әсәйең. Ҡарашың да, күңелең дә, аңың да ҡабул иткән тәүге ҡатын-ҡыҙ һыны - ул әсәйең. Әсәйеңде яратырға өйрәнәһең икән, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла ҡәҙерләргә һәм яратырға өйрәнәсәкһең. Шул саҡта үҙеңә оҡшаған бер ҡыҙ һине йылы ҡарашы менән иркәләгәнен, һиңә ҡарап йылмайғанын күрерһең. Һин уның етешһеҙлектәрен дә шәйләмәҫһең. Атай-әсәйҙәребеҙгә мөнәсәбәтебеҙ - ул беҙҙең бәхет үлсәме икәнен бер ваҡытта ла онотма..." Ошо кәңәштән һуң егет аҡһаҡалға рәхмәт әйтә һәм боролоп китергә йыйына. Ләкин аҡыл эйәһе уны тағы туҡтата һәм тағы бер кәңәшен еткерә: "Тағы шул: тормош көтөү өсөн һинең атайыңды яратҡан һәм баһалаған ҡыҙҙы һайла!.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22040

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1270

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.